ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 апрель (алағарай)

2021

№ 14 (952)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Пенсияға өҫтәмә кемгә?**




2-3

**Халҡыбыҙ именлеге гаранты -**

**Башҡортостан Республикаһы**



8-9

**"Өс таған"дың Гөлнуры**



11

**Баш ҡаланың...**

**милли рухиәт үҙәге**



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм йәмәғәт! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә 5 апрелдән 15-нә тиклем ташламалы - 619 һум 08 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә тоғро ҡалып, ошо осорҙа дәррәү генә яҙылып, уның дуҫтарын, уҡыусыларын арттырыуға ла булышлыҡ итәйек.***

***Мөхәрририәт.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Тыл ауырлыҡын өлкәндәр менән бергә күтәргән, бергә кисергән, Еңеүгә үҙ өлөшөн индергән, бала сағын һуғыш урлаған быуын ошоға тиклем дәүләт яҡлауынан ситтә ҡалып килгәйне. Әле бына ғәҙеллек тантана итте - БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары һуғыш балалары хаҡында закон ҡабул итте...***

***Эльвира АЙЫТҠОЛОВА, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары:*** "Берҙәм Рәсәй" фракцияһы депутаттары тәҡдим иткән закон проекты граждандарҙың был категорияһы өсөн айырым статус һәм социаль ярҙамдың өҫтәмә сараларын билдәләргә тәҡдим итә. Бала сағы дәһшәтле осорға тура килгән һәм уның бөтә ауырлығын үҙ иңендә татыған быуын һуғыштан һуң илде тергеҙеүҙә оло хеҙмәт батырлығы күрһәтте. Бөгөн улар оло йәштә һәм беҙҙең ярҙамға мохтаж. "Башҡортостан Республикаһында һуғыш балалары тураһында" закон проекты 1927 йылдың 22 июненән 1945 йылдың 3 сентябренә тиклем тыуған республика граждандарының матди, социаль, медицина тәьминәтен яҡшыртыуға йүнәлтелгән. Бындай категорияға ҡарағандар һаны бөгөн 190 мең тирәһе, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар йылдан-йыл кәмей. Ҡайһы бер төбәктәрҙә ошоға оҡшаш ҡанундар булһа ла, әлегә федераль закон юҡ.

Быйыл Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға 80 йыл тула. 2021 йыл Башҡортостанда Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылы тип иғлан ителде. Шуға күрә беҙҙең инициатива бик урынлылыр, тип уйлайым. Закон үрҙә атап кителгән граждандарға "Һуғыш балалары" статусын биреүҙе ҡарай. Был уларға медицина ярҙамы, стационар социаль хеҙмәтләндереү ойошмаларына йүнәлтмә алғанда өҫтөнлөклө хоҡуҡ бирәсәк. Бынан тыш, уларға бюджеттан бер тапҡыр бирелә торған түләү ҡаралған, уның күләме республика Башлығы тарафынан билдәләнәсәк. Бала сағы һуғыш осорона тура килгән быуын алдында беҙҙең бурыс бик ҙур. Рәхмәтебеҙҙе белдереү өсөн ниндәй генә ярҙам сараһы ла аҙ булыр кеүек. Киләсәктә уларҙың төрҙәрен киңәйткән яңы норматив акттар ҙа ҡабул ителер. Үҙ сиратыбыҙҙа беҙ, закон сығарыусы булараҡ, был законды ғәмәлгә ашырыу өсөн бюджет ҡабул иткәндә тейешле финанслауҙы ҡарарға ниәтләйбеҙ.

## МӨҺИМ ВАҠИҒАЛАР

# ҒӘЛИ СОҠОРОЙҒА...

**Башҡортостан Башлығы XIX быуаттың башҡорт суфый шағиры һәм мәғрифәтсеһе Ғәли Соҡоройҙоң (Мөхәмәтғәли Ғәбделсәлих улы Кейековтың) тыуыуына 200 йыл тулыуҙы байрам итеү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы.**




Документ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Ойоштороу комитетының етәксеһе - Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2021 йылдың 8 ғинуарында Тәтешле районында юбилей саралары башланды. Үрге Тәтешле ауылының яңы биҫтәһендәге урамдарҙың береһенә мәғрифәтсенең исеме бирелде. Ошо урамда уға мемориаль таҡтаташ асылды.



# БЕҘҘЕҢ КАРУАНҺАРАЙ

**2021 йылда Ырымбурҙағы "Каруанһарай" тарихи-архитектура комплексының 175 йыллығына арналған саралар ойошторола. Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡул ҡуйған указ 2021 йылдың 26 мартында республиканың хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған.**

Хөкүмәт вице-премьеры Азат Бадранов етәкселегендә сараларға әҙерләнеү һәм уларҙы уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты раҫланған. Ырымбурҙа тарихи-архитектура комплексы 1837-1846 йылдарҙа ирекле иғәнәгә Башҡорт-мишәр ғәскәре командующийы канцелярияһы, Ырымбурға "үҙ йомошо һәм эш буйынса" килгән башҡорттар һәм мишәрҙәр өсөн ҡунаҡхана, башҡорттар өсөн оҫтахана һәм мәктәп өсөн төҙөлгән. Тарихи-архитектура комплексы Башҡорт халыҡ йортонан һәм мәсеттән тора. 1917-1918 йылдарҙа Каруанһарайҙа республика хөкүмәте резиденцияһы һәм башҡорт ғәскәре урынлашҡан.

12+

✓ *Элек бит шулай була торғайны: һинең өсөн барыһын да етәкселек хәл итә ине. Үҙебеҙ ҙә уларға ныҡ ышанған булдыҡ, хоҡуҡтарыбыҙҙы ла белмәнек. Ҡартлығыбыҙ, буласаҡ пенсиябыҙ тураһында уй ике ятып бер төшкә инмәне.*



*ИҢ МАТУР ҺҮҘ*

# БАШҠОРТОСТАН - ГӨЛБОСТАН



**Һәйбәт рубрика булды был. Һәр хәлдә, тыуа-тыуғандан ҡабатлап, ҡәлбебеҙгә һеңгән, һыу һәм һауа кеүек көн дә кәрәк ҡәҙерле һүҙҙәребеҙҙе тағы бер күҙҙән үткәреү уның бәҫен тағы ла нығыраҡ тойорға ярҙам итә, мәғәнәһенә, яңғырашына, яҙылышына һоҡланаһың: әсәй, атай, бала, ватан, ҡояш, солох, бәхет, ҡот, бәрәкәт, йөрәк, һылыу, батыр... Барыһын да һанап бөтөрөп буламы һуң - тел байлығыбыҙҙың, камиллығының сигенә сығырлыҡ түгел. Ҡәҙерен генә беләйек тә танһыҡҡа, "һыуһынға" ғына - баһаһын, урынын белеп ҡулланайыҡ.**

Иң матур һүҙҙәр исемлегендә тәүге рәттәрҙә торған ҡеүәтле, яғымлы, яңғырашлы, бөтәбеҙ өсөн дә сикһеҙ ҡәҙерле тағы бер һүҙ бар: **Башҡортостан.** Башҡортостан! Ҡояш нурҙары балҡып, ҡурай моңо яңғырап киткәндәй был һүҙҙән. Башҡортостан - кесе ватаныбыҙ, башҡорттоң әлимсаҡтан үҙ иткән боронғо төйәгенең атамаһы.

"Маҡтап ҡурай уйнаһам,
Бөтмәй ҙә торған көй булыр.
Данлап йырым йырлаһам,
Бөтмәй ҙә торған йыр булыр", - тип данлаған бит башҡорт илен - тыуған төйәген Салауат батырыбыҙ ҙа. Ә Бабич ниндәй матур ынйы-мәрйендәй аҫыл һүҙҙәр менән яратҡан ватаныбыҙҙы: Башҡортостан - гөлбостан, сөмбөлостан, нурбостан, былбылстан, рәйхәаностан...

Үкенескә, ошо гүзәл гөлдәр баҡсаһына бәғзе бер һөмһөҙҙәр үҙ "уставы" менән "Башкирия" тип килеп инәләр, сәскәләрҙе тапайҙар, сөнки күрмәй, баһаламай улар матурлыҡты һәм һүҙ ҡәҙерен. Туң бәғер, минеңсә, ундайҙар. Әлбиттә, "Башкирия" тип әйтеү тыйылмай, ғәйеп тә түгелдер, ләкин уны күңел ҡабул итмәй. Ғәҙәттә, уны Башҡортостан тип әйтергә ҡыйынһынған кешеләрҙән ишетәһең. Ә инде урыҫса атама һөйләм һайын ҡабатлана башлаһа, ҡаным ҡайнап, радионы һүндереп үк ҡуям. Эйе, шундайҙар ҙа бар. Ҡыҙыҡ өсөн "Бизнес FM - Өфө" радиоканалы сығарылышын тыңлап ҡарағыҙ әле. Һөйләмдәре һайын "Башкирия" һүҙе ҡолаҡты ярып килә, күңел өсөн бер тапҡыр "Башҡортостан" тип әйтһәләрсе. Йылдан ашыу улар менән ҡайышып, өйрәтә алманым был канал хеҙмәткәрҙәрен. Нимәләр генә ишетмәнем, хатта махсус рәүештә студияға юрист саҡыртып, "Башкирия" тип әйтеүҙең закон боҙоу түгеллеген иҫбатларға маташтылар, "Башҡортостан" тип әйтергә телдәре әйләнмәүенә зарландылар... Тимәк, ағас тел былар, тип хәл иттем үҙемсә. Улай ғына ла түгел, сәйәси күрәғаралыҡ та был. Батша заманында әйткәндәр һәм яҙғандар ул "Башкирия" тип, тик хәҙер заман икенсе. Белмәгәндәр белеп ҡуйһын: Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы Юғары Советының ҡарары менән 1992 йылдың 25 февралендә ул саҡ БАССР-ҙан һуң БССР тип бер-ике йыл ғына йөрөтөлгән республикабыҙҙың атамаһын **Башҡортостан Республикаһы** тип үҙгәртеү тураһында Законға Мортаза Рәхимов тарафынан ҡул ҡуйылды. "Бынан ары БССР-ҙы Башҡортостан Республикаһы тип атарға", тип әйтелә уның тәүге статьяһында. Әйткәндәй, унда бер ниндәй ҙә "Башкирия" варианты хаҡында һүҙ юҡ. Башҡортостан Республикаһының Төп Законы - Конституцияла ла шулай уҡ.

Ләкин әйткәндәр әйтә инде, ауыҙҙарын ябып булмай. Бәлки, был әллә ни ҙур мәсьәлә лә түгелдер, ләкин улар шуны белһен: юғары мәҙәниле, республикабыҙ менән ғорурланған, уны яратҡан һәм ихтирам иткән грамоталы кеше (һынағаным бар) теле әйләнмәгәндә лә барыбер Башҡортостан тип әйтә. Бер ҙә телдәре лә, тештәре лә һынмай, шөкөр. Башҡортостан - иң матур һүҙҙәребеҙҙең береһе ул. Был атаманың асылын, ҡеүәтен, аһәңен, ҡәҙерен белгән кешеләр өсөн ул фәҡәт Башҡортостан булып ҡаласаҡ!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

**Рәсәй Пенсия фондынан, Башҡортостанда ауыл хужалығы өлкәһендә эш стажы 30 йылдан ашып киткән 55 мең пенсионерҙың аҡсаһы артасаҡ, тигән хәбәрҙе ишеткәс, бик ҡыуанғайным. Ниһайәт, халыҡты аҙыҡ-түлек һәм ҡайһы бер сәнәғәт тармағын сеймал менән тәьмин иткән, республика иҡтисадында мөһим урын алып торған ауыл хеҙмәтсәндәренә лә йөҙ менән боролдолар, тип шатландым.**

# ПЕНСИЯҒА ӨҪТӘМӘ КЕМГӘ?

Билдәләнгән 25 процент, иш янына ҡуш булып, бәләкәй генә пенсияма өҫтәмә булыр ине, тип уйланым. Ул ниндәй һөнәр эйәләренә бирелер, эшләгән пенсионерҙарҙыҡы артырмы, ауыл хужалығында эшләп, әлеге ваҡытта ҡалала йәшәгән пенсионерҙарға өҫтәмә булырмы, тигәнерәк һорауҙар тыуҙы башта. Уларға яуапты интернеттан да эҙләнем, бергә эшләгән тиҫтерҙәремдән дә һораштым, идаралыҡҡа ла барҙым. Ошо өлкәлә эшләгән танышымдан үҙемдең пенсиямды яңынан иҫәпләтеп тә ҡараным. Был тәңгәлдә хәҙер үҙем теләһә ниндәй һорауға яуап бирә алырлыҡ кимәлгә еттем, тип уйлайым.

Мин совет заманында тыуып, мәктәп тамамлап, армиянан һуң колхозға эшкә урынлашып, атайым кеүек механизатор булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡтым. Эшләгән осорҙа пенсия тураһында бөтөнләй тиерлек уйланманым. Ундайҙар мин генә түгел, әлбиттә. Элек бит шулай була торғайны: һинең өсөн барыһын да етәкселек хәл итә ине. Үҙебеҙ ҙә уларға ныҡ ышанған булдыҡ, хоҡуҡтарыбыҙҙы ла белмәнек, белергә лә теләмәгәнбеҙҙер инде. Ҡартлығыбыҙ, буласаҡ пенсиябыҙ тураһында уй ике ятып бер төшкә инмәне. Уның өсөн яуаплылыҡ тураһында уйлау башҡа ла инеп сыҡмай торғайны. Хәҙер генә ул пенсия грамоталығын үҫтерәбеҙ тип, колледждарҙа, техникумдарҙа уҡ йәш быуынға аңлатыу эштәре алып баралар. Совет заманының, әлбиттә, ыңғай яҡтары ла күп ине. Совхоз ауылда йәштәр өсөн заманса йорттар төҙөгәс, шуларҙың береһенән фатир бирҙеләр. Атай-әсәйҙән айырым йәшәргә теләк ҙур булғас, уны ҡуш ҡуллап ҡабул иттек. Балалар тыуҙы, уларҙы үҫтерешергә лә, тәрбиәләшергә лә хөкүмәт ярҙам итте. Был йәһәттән ул заманға һүҙ тейҙереп булмай. Балалар баҡсаһы ла булды, мәктәптә лә, һөнәри уҡыу йорттарында ла түләүһеҙ уҡынылар.

Шулай шатланып ҡына йәшәп ятҡанда ҙур ил таралды, колхоз-совхоздар юҡҡа сыҡты, беҙ эшһеҙ

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**Тыл ауырлығын өлкәндәр менән бергә күтәргән, бергә кисергән, Еңеүгә үҙ өлөшөн индергән, бала сағын һуғыш урлаған быуын ошоға тиклем дәүләт яҡлауынан ситтә ҡалып килгәйне. Әле бына ғәҙеллек тантана итте - БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары һуғыш балалары хаҡында закон ҡабул итте...**

***Фәүзиә ХӨСӘЙЕНОВА, Көйөргәҙе районы Ялсыҡай ауылы:*** Һуғыш башланғанда миңә һәм иптәштәремә 9-10-ар ғына йәш ине. Көҙ, ашлыҡ йыйыр ваҡыт еткәс, бөтәһе лә фронт өсөн, тип беҙҙе көн һайын башаҡ йыйырға алып сығалар. Комбайн артынан йөрөп, услап башаҡ йыябыҙ. Һәр класҡа йөкләмә бирәләр. Йыйған башаҡтарҙы келәткә алып барып тапшырабыҙ. Колхоз ҡайҙа ҡуша, шунда йөрөп эшләнек. Фронт өсөн тип, әсәйҙәр телемләп картуф киптерәләр, ойоҡбаштар, бейәләйҙәр бәйләйҙәр. Беҙҙән йөн теттерә торғайнылар. Ашарыбыҙға юҡ. Яҙ етеп, ҡар иреү менән кәбән төбөнә ашлыҡ йыйырға сығабыҙ. Ҡар аҫтында ҡалған ашлыҡ ағыулана икән, уны күп ашаған кешеләр тамаҡтары шешеп, танауҙарынан ҡан китеп үлделәр. Серек картуф ашайбыҙ. Ерҙә ҡышлап ҡалған картуф өшөй ҙә, яҙ етеп, ҡар һыуы аҡҡан саҡта өҫкә сыға, шуны йыйырға барабыҙ. Аҙаҡ ҡырҙа балтырған өлгөрә, шунан инде еләк бешә. Балтырғандан көлсә бешерәбеҙ. Һөтлө, ҡатыҡлы кешеләр бик бирешмәне. Аҫҡа интегеүселәр күп булды. Кешенең һыйыры булһа ла - һөтөн күрмәнеләр. Тауыҡтары булһа ла - йомортҡаһын ашаманылар. Хатта һарыҡ йөнөн дә тапшыртып, заем, һалым түләтәләр ине. Беҙҙең Таймаҫта МТС эшләне. Унда йәштәрҙе, ҡыҙҙарҙы тракторислыҡҡа, комбайнерлыҡҡа уҡыттылар. Ситтән килгәндәр фатирҙа ята. Көҙҙән киләләр, ҡыш буйы ремонтта булалар. Беҙҙә ятҡан ике балалы Сәрә апай, Мәғфиә апай - комбайнға, Мәғәфүрә апай тракторға уҡыны. Кис булһа, бөтәһе лә беҙҙең өйгә йыйылалар. Фронт өсөн ойоҡ, бейәләй бәйләйҙәр. Үҙҙәре эш эшләйҙәр, үҙҙәре туҡтауһыҙ фронт тураһында һөйләйҙәр, илашып та, йырлашып та алалар. Таң менән тороп, МТС-ҡа китәләр. Кеҫәләрендә булған бер һыныҡ икмәк менән кискә тиклем йөрөйҙәр. Өй һыуыҡ, утын юҡ. Һалам булһа ла яғып, кискелеккә мейесте йылытып ҡуябыҙ. Тракторҙарын ремонтлап ҡайтҡан йәш кенә ҡыҙҙарҙың һыуыҡ тимерҙәрҙе тотоп, бармаҡтары туңып бөтә ине...

Һуғыш бөткән йылды мин дүртенсе класты тамамланым. Бишенсене бөткәс, артабан уҡыуҙы дауам итә алманым, эшкә төштөм, сөнки һуғыш бөтөү менән генә ауырлыҡтар бөтмәгәйне әле...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында коронавирус менән ауырығанда һаулыҡҡа кире йоғонто яһаған һәм үлемгә килтергән хәүефле сирҙәрҙе атанылар. Хәбәр итеүҙәренсә, беренсе урында шәкәр диабеты тора. Икенселә - ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары. Өсөнсөлә - һимереү. Артабан тын алыу органдары сирҙәре килә. Башҡортостанда, 2 апрелгә мәғлүмәттәр буйынса, тәүлек эсендә коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 106 осрағы раҫланған. Асыҡланған сирлеләрҙең дөйөм һаны - 32 569. Пандемия башланғандан алып 367 кешенең ғүмере өҙөлгән.

✓Башҡортостан Республикаһы Рәсәй Хөкүмәтенең граждандарға илдә турҙар һатып алыуға тотонған аҡсаһын ҡайтарыу тураһында программаһын үтәү буйынса лидер тип танылды. Был хаҡта социаль селтәрҙә Радий Хәбиров хәбәр итте. Рәсәйҙә кешбэклы турҙар һатыуҙың өсөнсө этабы старт алды. Кешбэк алыу тураһында ентекле мәғлүмәт менән Ростуризм сайтында танышырға мөмкин.

✓Ишембай катализаторҙар махсуслаштырылған химия заводы - Рәсәйҙә катализаторҙар, адсорбенттар һәм киптергестәр етештереүсе предприятие. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ишембайҙа предприятиеның эше менән танышты. Предприятие директоры Александр Бодрый һөйләүенсә, завод продукцияның күпселек өлөшөн экспортҡа оҙата, уларға республика ярҙам күрһәтә, логистикаға, сертификацияға сығымдар ҡаплана. Бөгөн предприятиела 767 кеше эшләй, уларҙың төп өлөшө - йәштәр, уртаса айлыҡ хеҙмәт хаҡы - 44 мең һумдан ашыу.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә "Сколково" фондының төбәк һәм халыҡ-ара үҫеш буйынса вице-президенты Юрий Сапрыкин менән осрашты. Баш ҡалала IQ-парк - юғары технологиялар паркын булдырыу, шулай уҡ республикала инновациялар һәм технологик эшҡыуарлыҡ өлкәһендә фонд сараларын үткәреү осрашыуҙың төп темаһы булды. Радий Хәбиров билдәләүенсә, Башҡортостан - Рәсәйҙең алдынғы инновациялы төбәктәре исемлегендә. Иҡтисад, социаль өлкә һәм инфраструктура үҫешенең интеграль күрһәткестәре буйынса республика - иң яҡшы унау иҫәбендә.

**✓ Беҙ, халыҡ аслы-туҡлы ултырмаһын, тип, көнө-төнө тырыштыҡ, тик Дәүләт Думаһы депутаттары пенсия тураһында уйлап еткерелмәгән закон ҡабул итеү арҡаһында минималь пенсия алып ултырам инде бөгөн.**






ҡалдыҡ. Ауыл ерендә мал аҫрап йәшәргә була, тиҙәр ҙә ул. Бының өсөн малды ла, уға аҙыҡ-түлекте лә һатып алырға аҡса кәрәк бит. Ә совхозыбыҙ таралып, беҙ эшһеҙ ҡалған осорҙа бартер тигән әйбер сәскә атҡайны. Һин - миңә, мин - һиңә, тигән принципҡа ла бөтә ил менән өйрәнергә тура килде. Беҙҙең күршенең атын һыйыры һөҙҙө, саҡ салып өлгөрҙөләр. Икенсе көнөнә баҙарға барып һатҡан аҡсаға шулай уҡ бейә һатып алырға уйлағайны, ҡолонға ла етмәне, сөнки хаҡтар, сүпрәле ҡамыр һымаҡ, айлап, аҙналап түгел, ә көн һайын ҡабарған ваҡыт ине.

Мин пенсияға сыҡҡанда уның күләмен 2000-2001 йылдарҙағы эш хаҡынан сығып иҫәпләнеләр. Үрҙә әйтеп үткәнемсә, ул осорҙа ниндәй эш хаҡы булһын инде? Мәсьәләнең тағы бер яғы бар. Совхоздың кадрҙар бүлеге инспекторы намыҫһыҙ ханым булып сыҡты. Мин башҡарған бар эште лә хеҙмәт кенәгәһенә "сезонный", йәғни миҙгел эше тип яҙған. Һөҙөмтәлә минең кеүек йыл әйләнәһенә төрлө эштә йөрөгән кешеләрҙең стажы бик аҙ булып сыҡты. Беҙ уны һуңынан ғына белдек. Конторала йылыла ғына ултырғандың һыуыҡта туң тимер менән эш иткән кешелә ниндәй ҡайғыһы булһын инде! Шуның арҡаһында бик аҙ пенсия менән сыҡтым хаҡлы ялға. Был ғәҙел түгел ине, әлбиттә. Ниндәй ауыр эш башҡарғанды беҙ үҙебеҙ генә беләбеҙ. Ауылыбыҙҙа техниканы һаҡларға гараж юҡ ине, ҡыш көнө тракторҙы тоҡандырыр өсөн утын яғып һыу йылыта инек. Бының өсөн бер-ике сәғәт үтеп китә. Фермала һауылған һөттө фләктәргә тултырып, ҡалаға заводҡа илтәһең. Илтәһең, тип әйтеүе генә еңел ул, ҡыш көнө юл юҡ, бата-сума барып ҡайтаһың, тулы бер көн китә. Эш хаҡы көнөнә 3 һумдан артмай. Яҙ етһә, сәсеүгә сығаһың. Бында ла ял юҡ. Шунан бесәнгә төшәһең, көндәр ҡоро торғанда кәмендә 16-шар сәғәт тракторҙан төшмәйһең, тиһәң дә хата булмаҫ. Мал аҙығы әҙерләп бөтмәҫтән комбайнға ултырталар. Бына ошо "сезонлы эш" булып сыҡты инде. Кем был терминды уйлап тапҡандыр, белмәйем, ләкин ул совет власының һуңғы йылдарында ауыл хужалығында эшләгәндәрҙең күбеһенең, бик күбеһенең тейешле пенсияһын юҡҡа сығарҙы. Беҙ, халыҡ аслы-туҡлы ултырмаһын, тип, көнө-төнө тырыштыҡ, тик бер ҡасан да ауыл хужалығында эшләп ҡарамаған Дәүләт Думаһы депутаттары пенсия тураһында уйлап еткерелмәгән закон ҡабул итеү арҡаһында минималь пенсия алып ултырам инде бөгөн.

Шуға ла пенсияға ҡағылышлы һәр яңылыҡты ҡолаҡты ныҡ ҡарпайтып ҡаршы алам. Утыҙ йыл эшләгәндәргә өҫтәмә ҡараласағын ишеткәс тә ауылдаштарымдың күбеһе яҡшыға өмөтләнде. Тик тәүҙә беҙҙең күбебеҙ эш стажын иҫәпләү өсөн Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарарында раҫланған эштәр, производстволар, һөнәрҙәр, вазифалар исемлеге ҡулланылыуын белмәй инек әле. Биш йөҙҙән ашыу һөнәр буйынса колхоз-совхоздарҙа һәм башҡа ауыл хужалығы ойошмаларында эшләү иҫәпкә алына икән. Өҫтәмәнең уртаса суммаһы - 1421 һум. Бик күп тә түгел, шулай ҙа барып, яңынан иҫәпләтеп ҡараным. Күптәр 30 йыл өҙлөкһөҙ стаж булырға тейешме, хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң эшләгән йылдар стажға инәме, тип ҡыҙыҡһына. Пенсияны иҫәпләгәндә дөйөм стаж иҫәпкә алына. Мәҫәлән, әгәр хаҡлы ялға сыҡҡансы ауыл хужалығында егерме алты йыл эшләгән булһаң, пенсияға сыҡҡас тағы 4 йыл эшләһәң, эш стажы өс тиҫтә йылға тула. Иң мөһиме, был йылдарҙа ла ауыл хужалығы өлкәһендә эшләргә кәрәк.

Тағы шуныһына иғтибар итеү мөһим: был өҫтәмә ауыл хужалығында эшләгән бөтә һөнәр эйәләренә лә тәтемәй. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарары менән раҫланған эштәр, производстволар, һөнәрҙәр, вазифалар исемлегенә ингәндәр генә уны алырға хоҡуҡлы. 1992 йылдың 1 ғинуарына тиклем колхоз, совхоз, машина-трактор йыйыу комплексында эшләгәндәрҙең барыһы ла, вазифаһына ҡарамай, ауыл хужалығы тармағында эшләгән булып иҫәпләнә. Колхозға, совхозға ҡараған балалар баҡсаһында эшләгәндәр ҙә ауыл хужалығы өлкәһендә эшләгән иҫәпләнә. 1992 йылдан һуң ғына үҫемлекселек һәм малсылыҡта тир түккәндәрҙе иҫәпкә алғандар. Мәҫәлән, ҡоҙам ғүмер буйы ауылда йәшәп, механизатор булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан. Был өҫтәмәне ул да ала алмай, сөнки ул пенсияға сыҡҡас, ҡалаға күсеп китте. Баҡһаң, теркәлеү урыны буйынса ул ҡала кешеһе булып иҫәпләнә икән. Уға шулайтып аңлатҡандар. Утыҙ йыл буйы ауылда йәшәгәнлеген раҫлаусы документтар килтерергә тейеш булып сыҡты. Ҡатыным әлеге ваҡытта мәктәптә иҙән йыуа. Ауыл хужалығында дөйөм эш стажы утыҙ йыл. Эшләүен дауам иткәс, ул әлегә был өҫтәмәне алмай, эштән киткән осраҡта ғына индексацияланған пенсияны алырға хоҡуҡлы тиneләр.

Шулай итеп, ауыл хужалығында эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡандарҙың баяғы өҫтәмәне алырға хоҡуҡлы булғандары ла борсоуға ҡалғайны, сөнки уларҙың күбеһе оло йәштә һәм уларға документ, ҡағыҙ юллау, юл йөрөү анһат эш түгел. Был йәһәттән уларҙы һөйөндөрә алам: бер ниндәй ҙә документ илтеү кәрәкмәй. Әгәр ҙә стаж йәки йәшәгән урын буйынса өҫтәмә документтар килтереү кәрәкһә генә теркәлгән урын буйынса Пенсия фонды идаралығына мөрәжәғәт итеү мөһим.

**Салауат ДӘҮЛӘТХУЖИН,**
**элекке механизатор.**
**Көйөргәҙе районы.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### Тыл ауырлығын өлкәндәр менән бергә күтәргән, бергә кисергән, Еңеүгә үҙ өлөшөн индергән, бала сағын һуғыш урлаған быуын ошоға тиклем дәүләт яҡлауынан ситтә ҡалып килгәйне. Әле бына ғәҙеллек тантана итте - БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары һуғыш балалары хаҡында закон ҡабул итте...

***Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА, шағирә, журналист, Ш. Хоҙайбирҙин премияһы лауреаты:*** Һуғыш ауырлығын фронттағы яугирҙар ғына түгел, тылда ҡалған ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, өлкән йәштәгеләр бөтәһе берҙәй тигеҙ күтәргән. Фронтты ҡорал, яғыулыҡ, кейем, аҙыҡ-түлек, техника һәм башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеп тороусы тыл булмаһа, халҡыбыҙ был ҡот осҡос һуғышта еңеү яулар инеме? Һуғыш йылдарының барлыҡ михнәттәрен үҙ елкәләрендә күтәргән балалар, үҫмерҙәр хәҙер һикһәнгә етеп, бик аҙҙары ғына туҡһанды тултыра. Һуғышта ҡатнашыусылар менән бергә тыл ветерандары сафтары ла кәмей бара. Шуға ла мин байтаҡ йылдар элек уларҙың иҫтәлектәрен йыя башлағайным. Утыҙ йыллап ғүмеремде шуға бағышланым, хәтирәләр күпләп тупланды. Уларға бағышланған беренсе китабым "Һуғыш балалары - тарих яралары" - Еңеүҙең 65 йыллығына, икенсе китап - "Һуғыш яралаған бала саҡ" - 70 йыллыҡҡа, ә өсөнсөһө - "Һуғыш балалары һөйләй" йыйынтығы Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә баҫылып сыҡты. Уларҙа республикабыҙҙың күпселек район-ҡалаларынан 300-ҙән ашыу кешенең иҫтәлектәре донъя күрҙе. Тәүге йыйынтыҡты мин 13 йәшенән генә тылда эшләгән әсәйем Миңһылыу Шәрифйән ҡыҙы менән һуғыштан ауыр контузия алып, яраланып ҡайтҡан атайым Сәлимйән Ноғман улы Ҡотлогилдиндарға бағышланым, сөнки уларҙың күргәндәре миллионлаған башҡа тыл һәм һуғыш ветерандарының уртаҡ яҙмыштарын сағылдыра. "Үгеҙ менән ер һөрҙөк, ашлыҡты, тарыны ҡул менән сәстек, һыйыр менән ер тырматтыҡ, ҡул салғыһы менән бесән саптыҡ, көндөҙ сапһаҡ, кисен йыйҙыҡ, төндә өйҙөк", - тип шул йылдарҙағы тормоштары хаҡында йыш һөйләне әсәйем. Быуындары ла нығып өлгөрмәгән ошо балаларҙы тракторсылыҡҡа уҡытырға ебәргәндәр. Әсәйем дә шулар араһында булған. Һуғыш бөткәнсе ул тәгәрмәсле тракторҙа эшләгән. Ышыҡланып ултырырға кабинаһы ла булмаған уның. "Төнө буйы эшләп, иртән ҡырау төшкәндә башымдағы яулығымды ла ҡырау ҡаплай торғайны", - тип һөйләгәне иҫемдә. Шуның һөҙөмтәләре эҙһеҙ үтмәй. Ғүмер буйы баш ауыртыуына зарланды. Кейергә кейем юҡлығы арҡаһында һалҡын тейҙереп, ҡырҡ йәшендә аяҡтары һыҙлап, егерме ике йыл атлап йөрөүҙән мәхрүм булып ултырҙы.

Яралары ла уңалып етмәҫтән, инвалидмын тип тормаған, атайыбыҙ ҙа ҡайтыу менән тракторға ултырып, көнө-төнө эшләгән. Ахырҙа, һуғыш яраларынан мандый алмай, атайыбыҙ 28 йәшендә генә донъя ҡуя.

Бындай закон элегерәк кәрәк ине, тимәксемен, сөнки тыл ауырлығының иң әсеһен кисергән һуғыш балаларының күбеһе беҙҙең арала юҡ инде хәҙер, иҫән булғандары ла бик оло йәштә. Утлы йылдарҙа сыныҡҡан быуын булараҡ, улар барына шөкөр итеп, йә үҙаллы, йә балалары ғаиләһендә йәшәп яталар. Уларға хәҙер бер ни ҙә кәрәк тә түгел һымаҡ, ләкин Башҡортостан депутаттарының был ҡарары һуғыш балалары өсөн барыбер ниндәй ҙә булһа хәстәрлек һәм ярҙам, уларҙан һуң килгән быуындар рәхмәте булып ҡабул ителер, моғайын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Аҫҡын районында Аҫҡын районы хакимиәте башлығы Ришат Дихин менән хушлашыу сараһы булып үтте. Ул 33 йәшендә коронавирус инфекцияһынан вафат булды. Сарала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев, күрше район хакимиәттәре башлыҡтары, Ришат Дихиндың туғандары, дуҫтары, коллегалары, Аҫҡын халҡы ҡатнашты. Ришат Дихин тыуған яғында, Аҫҡын районы Урмияҙ ауылында ерләнде.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың бойороғо менән Данияр Абдрахманов Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы ректоры итеп тәғәйенләнде. Данияр Абдрахманов 1980 йылдың 25 ноябрендә Өфөлә тыуған. Башҡорт дәүләт университетын, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлаған. Рәсәй дәүләт социаль университетында, Татарстан Фәндәр академияһында һөнәри әҙерлек үткән. Философия фәндәре кандидаты, доцент.

✓Башҡортостанда әлеге ваҡытта 200-гә яҡын уҡыусы һәм 138 уҡытыусы COVID-19 менән сирләй, тип белдерҙе мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә. 22 мартҡа мәғлүмәттәр буйынса, бөгөнгә мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында балалар араһында - биш, хеҙмәткәрҙәр араһында 18 сирле теркәлгән. Ғөмүмән, дөйөм белем биреү ойошмаларында ауырыуҙар һанының ҡырҡа кәмеүе күҙәтелә. Республика етәксеһе Радий Хәбиров билдәләүенсә, эпидемиологик хәлдең яҡшырыуына ҡарамаҫтан, тынысланырға ярамай.

✓1 апрелдән 3-7 йәшлек балаһы булған ғаиләләр арттырылған пособиеға дәғүә итә ала. Март башында Владимир Путин ошондай указға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостанда 80 меңдән ашыу ғаилә арттырылған түләү алырға хоҡуҡлы, тип һөйләне республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Ольга Кабанова. Уның һүҙҙәренсә, әгәр элек рәсми килеме йәшәү минимумынан түбәнерәк булған бөтә ғаиләләр ҙә ярлы тип иҫәпләнһә, хәҙер иһә ғаиләнең мөлкәте: фатирҙары, йорттары, ер участкалары, транспорты ла иҫәпкә алына.

✓ *М. Увайдов һүҙҙәренсә, республикала Башҡорт дәүләт аграр университеты уңышлы эшләй. Федераль министрлыҡ юғары уҡыу йортон өҫтәмә финансларға һәм абитуриенттар өсөн бюджет урындарын арттырырға йыйына.*



КӨНАУАЗ

# ҮҘГӘРТЕҮҘӘР, БЕРЛӘШЕҮҘӘР...

**БР Башлығы Радий Хәбиров республиканың Фәндәр академияһын һәм уға ҡараған ойошмаларҙы үҙгәртеп ҡороу, шулай уҡ БР Фәндәр академияһының Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтын федераль милеккә күсереү тураһында ҡарар ҡабул итте.**

Документҡа ярашлы, БР "Башҡортостан энциклопедияһы" ғилми учреждениеһы һәм БР Стратегик тикшеренеүҙәр институты "Башҡортостан Республикаһының Социаль-гуманитар тикшеренеүҙәр һәм энциклопедистика институты" дәүләт автономиялы ғилми учреждениеға берләшә. Бынан тыш, документ Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡарамағында булған Башҡорт дәүләт медицина университеты ҡарамағына күсеүен күҙаллай. Был хаҡта "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына БР Фәндәр академияһы президенты Әлфис Ғаязов түбәндәгеләрҙе еткерә: "Беҙҙең эшмәкәрлектең асылы үҙгәрмәй, бары тик ойоштороу формаһы ғына үҙгәреш кисерә. Беҙ төбәк фәненең республика үҫешенә йоғонто яһауын, ҡарарҙар ҡабул иткәндә Башҡортостан ғалимдарҙың тикшеренеүҙәренә йүнәлеш тота икәнен күрһәтергә теләйбеҙ. Беҙ, Фәндәр академияһы булараҡ, элекке составта ҡалабыҙ һәм ғалимдарға ярҙам итеүгә бәйле мәлдәр һаҡлана".

Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының Башҡорт дәүләт медицина университеты менән берләшеүе тураһында БДМУ ректоры Валентин Павлов, был ике коллективтың берҙәм ҡарары, тип белдерә: "Ике учреждениены берләштереү - ул, беренсенән, донъя кимәлендә лә күренһен өсөн Башҡортостандың фәнни йүнәлештәрен киңәйтеү. Был белем биреүҙе экспортлауҙа әүҙем ҡатнашыу мөмкинлеге бирә. Бөгөн беҙҙә 54 илдән 2,5 мең студент белем ала, киләсәктә улар тағы ла күберәк буласаҡ. Күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты базаһында яңы кафедралар асыласаҡ. Был шулай уҡ сит илдәрҙән ауырыуҙарҙы ҡабул итеү, йәғни институттың федераль, донъя кимәленә сығыуын тәьмин итәсәк. Ике учреждениеның синергизмы офтальмологтар, йәш табиптар, университет профессорҙарының ординаторҙар ҡеүәтен файҙаланыу мөмкинлеген бирәсәк. Үҙгәрештәр ике учреждениеға ла файҙаға ғына буласаҡ һәм беҙгә республиканың бөтә донъяға билдәле офтальмология фәнни мәктәбен һаҡлау һәм үҫтереү мөмкинлеге бирәсәк. БДМУ өсөн был белем биреү, фәнни база мәсьәләләрен киңәйтеү. Ә иң мөһиме - офтальмологияны фән булараҡ үҫтереү мөмкинлеге".

"Был үҙгәрештәр - бөгөн Рәсәйҙә формалашҡан программа документтарын тормошҡа ашырыу, - тип үҙенең фекерен белдерә БР Стратегик тикшеренеүҙәр институты директоры Александр Дегтярев. - Донъя ла, иҡтисад та үҙгәрҙе, заман яңы ҡараш талап итә. Академия структураһы ла элеккесә ҡала алмай, уның составына ингән институттар ҙа үҙгәреш кисерә. Стратегик тикшеренеүҙәр институтына энциклопедик үҙәктең ҡушылыуы - республика үҫешен фәнни нигеҙләүҙе модернизациялауҙың логик дауамы ул. Һәм беҙ быны дөрөҫ, ваҡытлы ҡарар тип иҫәпләйбеҙ. Дөйөм алғанда, бөгөн фәнни һәм юғары белем биреүҙең һөҙөмтәле системаһын ойоштороу - ул дөйөм федераль тренд. Әгәр Башҡортостан унда ҡатнашмаһа, төбәкте, утрау кеүек, инвестициялар һәм башҡа программалар урап үтәсәк".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ИДАРА ИТЕҮ ХОҠУҒЫ...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин "Башҡортостан сода компанияһы" акционерҙар йәмғиәте акцияларының 38,3 процентын Башҡортостан Республикаһы милкенә, шулай уҡ 11,7 процент плюс бер акцияны ышаныслы идараға тапшырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Шулай итеп, республика предприятиены контролдә тотоу хоҡуғын алды, ул уның үҫеше менән идара итергә тейеш.**

"Компанияның оҙаҡ сроклы, һөҙөмтәле эшен һәм конкурентлыҡҡа һәләтле продукция сығарыуҙы тәьмин итеү мөһим, - тине Владимир Путин 31 мартта Рәсәй Хөкүмәте ағзалары менән кәңәшмәлә. - Кешеләр өсөн хеҙмәт хаҡын, эш урындарын һаҡлап ҡалыу бик мөһим. Төп мәсьәләләрҙең береһе - предприятие менән грамоталы идара итеү. Был йәһәтән ҡарарҙар ҡабул ителде. Рәсәй Хөкүмәтенән "Башҡортостан сода компанияһы" акцияларының 38,3 процентын Башҡортостан Республикаһына тапшырыуҙы һорайым. Ләкин, бынан тыш, тағы 11,7 процент плюс бер акцияны - республика Хөкүмәтенең тулы контролендә булған структураларға ышаныслы идараға тапшырыуҙы һорайым. Тимәк, республика был компания менән тулыһынса идара итергә мөмкин".

Республика Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй 24 телеканалына Рәсәй Президенты Владимир Путиндың был ҡарарына аңлатма бирҙе: "Хәҙер был мәсьәлә тулыһынса ябылды, тип ышаныслы әйтә алабыҙ, сөнки Рәсәй Президентының бөтә ҡарарҙарын ғәмәлгә ашырғандан һәм документтарҙы рәсмиләштергәндән һуң, предприятие менән идара итә башлайбыҙ, - тине республика етәксеһе. - Ләкин ошо ваҡытҡа тиклем үк республика халҡының үтенесе буйынса Ҡуштауға тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын бирергә хәл иткәйнек. Йәғни шихан тейелгеһеҙлек хоҡуғына эйә булды. Беҙ өс шихан урынлашҡан бөтә биләмә буйынса ЮНЕСКО геопаркы статусын алыу өсөн досье ебәрҙек. Йәғни беҙ туҡтап ҡалманыҡ. Ошо шиханға лат халыҡ-ара статусы бирергә теләйбеҙ. ЮНЕСКО-ла ғаризабыҙҙы ҡарауҙың беренсе этабын уңышлы үттек. Ҡәтғи ҡарар көтәбеҙ. Шуға күрә бөтә көсөбөҙ менән шихандарыбыҙҙы һаҡлап ҡалырбыҙ".

## АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ

**Рәсәйҙең ауыл хужалығы министры урынбаҫары Максим Увайдов Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров менән эш осрашыуында республикала алып барылған ауыл хужалығы малдарын идентификациялау һәм иҫәпкә алыу эшенең һөҙөмтәләрен юғары баһаланы.**

Әйтәйек, автоматлаштырылған берҙәм мәғлүмәт системаһында 100 процентҡа яҡын эре мал, сусҡа, 90 процент самаһы йылҡы, ваҡ мал теркәлгән дә инде. "Беҙ һеҙҙе йыш ҡына өлгө итеп ҡуябыҙ. Республика - был йүнәлеш буйынса Рәсәйҙә алдынғылар иҫәбендә. Ауыл хужалығы тармағындағы малдарҙы иҫәпкә алыуҙың федераль системаһын булдырыу өсөн һеҙҙең тәжрибәне Рәсәй кимәлендә файҙаланырбыҙ", - тип билдәләне Максим Увайдов.

- Ошондай баһа өсөн рәхмәт. Ысынлап та, беҙҙә ветеринария хеҙмәте көслө. Беҙ уға әүҙем ярҙам күрһәтәбеҙ - техника һатып алдыҡ, лабораторияны йыһазландырҙыҡ. Был эштең һөҙөмтәһе бар. Картаға күҙ һалһағыҙ, республикабыҙ тирәләй бөтә ерҙә - сусҡаларҙың Африка тағуны, башҡа хәүефле сирҙәр. Әлегә беҙҙә хәл тотороҡло, - тине Радий Хәбиров.

Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы агросәнәғәт комплексы өсөн юғары квалификациялы белгестәр әҙерләүгә лә ҙур иғтибар бүлә. Максим Увайдов һүҙҙәренсә, республикала Башҡорт дәүләт аграр университеты уңышлы эшләй. Федераль министрлыҡ юғары уҡыу йортон өҫтәмә финансларға һәм абитуриенттар өсөн бюджет урындарын арттырырға йыйына.

## ХӘТЕР МӘҢГЕЛЕК

**Былтыр йыл аҙағында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары тураһында биографик белешмәнең электрон варианты донъя күрһә, ошо көндәрҙә ул сикле күләмдә китап булып сыҡты. Белешмәгә барлығы 2700 яугир тураһында мәғлүмәт ингән.**

Ошо уңайҙан Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ойоштороған исем туйында Шайморатов варисҭары - яугирҙарҙың балалары, ейәнейәнсәрҙәре, бүлә-бүләсәрҙәре һәм "Шайморатовсылар" проекты активистары, төрлө ҡыҙыҡһыныусы ойошмалар вәкилдәре ҡатнашты.

Шулай уҡ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты дивизияның хәрби юлына арналған коллекция альбомы ла сығарған. Унда РФ Үҙәк банкының ҡиммәтле булмаған металдан эшләгән Бөйөк Ватан һуғышы юбилейына арналған иҫтәлекле аҡсалар серияһы тупланған. Уларҙа азат итеүҙә дивизия ҡатнашҡан герой-ҡалалар, ауылдарҙың һүрәте төшөрөлгән. Шулай уҡ 112-се кавдивизияның хәрби операциялары исеме менән аталғандары ла бар. Альбом Хәрби дан һәм 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейҙарына тапшырылды.

## ЕҢЕҮ КӨНӨНДӘ...

**9 майҙа илдең 28 ҡалаһында, шул иҫәптән Мәскәүҙә Еңеү көнө уңайынан хәрби парадтар ойоштороla. Уларҙа 47 меңдән ашыу кеше, 1,6 мең берәмеккә яҡын хәрби техника һәм 200-ҙән күберәк һауа судноһының ҡатнашыуы көтөлә, тип белдерҙе Оборона министрлығы башлығы Сергей Шойгу коллегия ултырышында.**

Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙандағы сараға ныҡлы әҙерлек бара, тип билдәләне министр. Баш ҡалалағы парадҡа 12,5 меңдән күберәк кеше, 190-дан ашыу ҡорал, хәрби техника һәм 76 осоу аппараты йәлеп ителә. Башҡортостан Башлығының Еңеү көнөн билдәләү тураһында бойороғона ярашлы, республикала ла төрлө саралар ойоштороу планлаштырыла. Әйтәйек, 7 майҙа - "Башҡортостан" дәүләт концерт залында байрам концерты, 9 майҙа - Өфөнөң Еңеү паркында сәскәләр һалыу тантанаһы, Мәңгелек ут янында почетлы ҡарауыл, хәрбиҙәр парады, хәрби техниканы һәм ретроавтомобилдәрҙе күрһәтеү, "Үлемһеҙ полк" акцияһы. Район хакимиәттәренә яугирҙарҙың ҡәберлектәрен тәртипкә килтерергә, байрам саралары уҙғарырға һәм "Үлемһеҙ полк" акцияһына ҡушылырға тәҡдим ителде. Билдәләнеүенсә, фронтовиктарҙы, тыл эшсәндәрен һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың тол ҡатындарын тантаналы рәүештә ҡотлағанда республика етәксеһенең "Яңы коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефенә бәйле "Юғары әҙерлек" режимын индереү тураһында" указында билдәләнгән ҡағиҙәләр теүәл үтәлергә тейеш.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓30 майға тиклем Өфөнөң 2022 йылда төҙөкләндерелергә тейешле йәмәғәт урындарын һайлау буйынса "Регион РБ" электрон майҙансығында тауыш биреү үткәрелә. Баш ҡала унда Орджоникидзе районында урынлашҡан ике объектты - Блюхер урамынан алып Октябрь проспектына тиклем Дан бульварын һәм Муса Гәрәев скверын төҙөкләндерергә тәҡдим итә. Тауыш биреүҙә ҡатнашҡан һәр кеше йәшәү урыны буйынса бер территорияны һайлай ала. Иң күп тауыш йыйыусы объект еңеүсе буласаҡ.

✓Өфөлә яҙғы каникулдарҙа 79 көндөҙгө лагерь эшләй. Был аҙнала унда 6 меңдән ашыу уҡыусы ял итергә тейеш, тип хәбәр иттеләр мэрияның матбуғат хеҙмәтенән. Лагерҙың эше яңы коронавирус инфекцияһы таралыу шарттарында белем биреү ойошмаларына ҡуйылған санитар-эпидемиологик талаптарға ярашлы ойошторола. Балалар ике тапҡыр туҡлана. Тематик сменаларҙың йөкмәткеһе йүнәлеш һайлау проекты сиктәрендә һәм балаларҙың теләген, ата-әсәләрҙең һорауын иҫәпкә алып әҙерләнгән.

✓Өфөлә биләмәне санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү айлығы старт алды. Ул 30 апрелгә тиклем дауам итә. Дөйөм ҡала өмәләре 10 һәм 24 апрелдә үткәрелә. Өфөнөң коммуналь хеҙмәттәре һыу, шулай уҡ биошампунь менән тротуарҙарҙы һәм туҡталыштарҙы йыуыу эшенә тотондо. Бының менән ҡала райондарының төҙөкләндереү хеҙмәттәре һәм "СУРСИС" ойошмаһы шөғөлләнә. Өфөлә бөтәһе 1 200-ҙән ашыу йәмәғәт транспорты туҡталышы бар, яртыһын муниципаль предприятиелар хеҙмәтләндерә. Тротуарҙағы туҙан, бысраҡ ҡул көсө менән, шулай уҡ һепереү-вакуум техникаһы ярҙамында таҙартыла.

✓9 апрелдә Өфөнөң "Торатау" Конгресс-Холында өсөнсө "Юғарыға ос!" мәктәп белем биреү форумы ойошторола. Республика хөкүмәтенең тейешле бойороғо кесаҙна Башҡортостандың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Ойоштороу комитетына форумды уҙғарыу буйынса саралар планын әҙерләү бурысы йөкмәтелде. Ул шулай уҡ форумда COVID-19-ҙың таралыуын иҫкәртеүгә йүнәлтелгән санитар-эпидемиологик талаптарҙы үтәүҙе тәьмин итергә тейеш. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, Өфөлә икенсе "Юғарыға ос!" мәктәп белем биреү форумы 2020 йылдың 28 февралендә булғайны.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺОРАУ - ЯУАП

# ЕРЛЕ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...



**Башҡортостанда ер участкаһын ҡуртымға алыу, икенсе категорияға күсереү йәки ергә ҡағылышлы башҡа проблемаларҙы хәл итеү өсөн хәҙер документтар йыйырға, урындағы хакимиәткә барырға кәрәкмәй. Быларҙың барыһы ла электрон төргә күсерелде һәм интернет аша ғына заказ бирергә мөмкин. Республика Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы эксперттары уны нисек эшләргә кәрәклеген өйрәтә:**

### Ниндәй хеҙмәттәр цифрлаштырылды?

Әлегә халыҡҡа 17 хеҙмәт төрө күрһәтелә. Улар араһында иң популярҙары: сауҙалашыуһыҙ ер участкаһын ҡуртымға алыу; бушлай файҙаланыуға алыу; даими файҙаланыуға алыу; ер участкаһын бер категориянан икенсеһенә күсереү; ер участкаһын шәхси торлаҡ, ферма төҙөү, баҡсасылыҡ эшен алып барыу өсөн алыу. Йыл аҙағына тиклем тағы туғыҙ хеҙмәт төрө өҫтәләсәк. Улар араһында ер участкаһы урынына аҡсалата компенсация алыу, ерҙе эшкәртеүгә милексе йәки файҙаланыусының килешеүе, участканы ҡуртымға алыу килешеүендәге иҫәп буйынса дөрөҫләктө тикшереү акттарын әҙерләү бар. Киләсәктә ер мөнәсәбәттәре өлкәһендә бөтә дәүләт хеҙмәттәрен цифрлаштырыу, шул иҫәптән "Ҡуртымға алыусының шәхси кабинеты"н асыу планлаштырыла.

### Нисек хеҙмәтләндерәләр?

Башҡортостан Республикаһы дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр порталына инәбеҙ, уң яҡта өҫтәге "Шәхси кабинет" ("Личный кабинет") төймәһенә баҫабыҙ, үҙеңдең иҫәп яҙыуы аша "Дәүләт хеҙмәттәре"ндә ("Госуслуги") теркәләбеҙ. "Ер" ("Земля") бүлеген асабыҙ, унда кәрәкле хеҙмәтте табабыҙ, буш юлдарҙы тултырабыҙ, тейешле документтарҙы беркетәбеҙ. Бөтәһе лә әҙер булғас, һеҙҙең шәхси кабинетҡа белдереү ҡағыҙы килә. Унда ҡағыҙҙарҙың төп нөсхәһен ҡайҙан алырға икәне яҙыласаҡ.

### Быға тиклем ни өсөн шулай эшләп булманы?

2020 йылға тиклем һәр район һәм ҡалала "милек хоҡуғы сикләнмәгән" тип аталған ер участкаһын биреүҙең үҙ ҡағиҙәһе бар ине. Был, участка дәүләттеке, әммә аныҡ ҡына бер кем дә эйә түгел, тигәнде аңлата. Былдай ерҙәр республикала бик күп, билдәмәнең өстән бер өлөшөн, йәғни урман булмағандың 90 процентын тәшкил итә. Ер участкаһы алыр өсөн бер ерҙә 15, икенсеһендә 20-ләп документ йыйырға, аҙаҡ береһендә 30 көн, икенсеһен 60 көн көтөргә кәрәк ине. Уның төп етешһеҙлеге - контролдә тотоп булмаған бюрократия. Меңәрләгән ябай кеше йылдар буйы ер ала алмай йөрөнө. Ҡайһы бер райондарҙа ерҙе тик "үҙ" кешеләренә генә биреү осраҡтары ла билдәле.

Үткән йылдың октябрендә Дәүләт Йыйылышы депутаттары ер тураһында законға төҙәтмәләр индерҙе. Уға ярашлы, бөтәһе өсөн дә документтарҙың дөйөм исемлеге булдырылды, шунан артыҡ бер нәмә лә талап итеlергә тейеш түгел. Был яңылыҡ үҙенең өҫтөнлөгөн күрһәтте лә инде. Хәҙер документтарҙы компьютер тикшерә. Ул тулыһынса дәүләт хеҙмәткәренең "кеше факторы"н һәм "шәхси мөнәсәбәт"ен инҡар итә. Һөҙөмтәлә ниндәйҙер билдәләр буйынса килгән ғаризаларҙы кире ҡайтарыу осраҡы кәмене. Шулай уҡ заявканы ҡарау ваҡыты ла ҡыҫҡарҙы.

Бер ҡайҙа ла барырға кәрәкмәй, бөтә һорауҙар ситтән тороп хәл ителә. Мәҫәлән, Өфөлә йәшәп, интернет йәки Күп функциялы үҙәк аша Йылайыр районынан участка алырға ғариза бирә алаһығыҙ. Интернет аша теләмәһәгеҙ, Күп функциялы үҙәк һәм республиканың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығының территориаль идаралығы аша шәхсән мөрәжәғәт итергә мөмкин. Улар бөтә район-ҡалаларҙа эшләй.

**"БАШИНФОРМ".**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЛАЛЫЛАРҒА

**Һигеҙ йәшкәсә балаларға аҡса алмаған ғаиләләрҙән ғаризалар 1 апрелгә тиклем ҡабул ителә, тип белдерҙеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ата-әсәләр, уллыҡҡа алыусылар йәки опекундар һигеҙ йәшкә тиклемге балалар өсөн биш мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләүгә хоҡуҡлы. Республикала күпселек ғаиләләргә аҡса автоматик рәүештә - 2020 йылдың 17 декабрендә һигеҙ йәше тулмаған 387 мең балаға, 2021 йылдың 16 мартына 414 мең балаға ғаризаһыҙ күсерелде.

"2020 йылдың 1 июленән һуң тыуған балаларҙың ата-әсәләре 31 мартҡа тиклем ғариза бирергә мөмкин", - тип өҫтәнеләр Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә. Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша электрон төрҙә йәки Пенсия фондының клиент хеҙмәтендә шәхсән тапшырырға була.

Һәм тағы. Башҡортостанда 100 мең ғаилә 1 апрелдән 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаларға арттырылған пособие алырға мөмкин. Республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә ошо турала хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, хәҙерге көндә пособиеның база күләме итеп балаға төбәк йәшәү минимумынан 50 процентына тиң сумма ҡабул ителгән. Башҡортостан өсөн был биш мең һумдан саҡ ҡына күберәк. Артабан пособиеның суммаһы ғаиләнең килеменә бәйле була. Әгәр база пособиеһын түләгәндән һуң ғаиләнең йән башына уртаса килеме төбәк йәшәү минимумынан аҙыраҡ ҡалһа, түләү 75 процент - 7 557,75 һумға тиклем арттырыла. Бынан һуң да төбәк йәшәү минимумына еткереп булмаһа, түләү 100 процент - 10 077 һумға тиклем артырға тейеш. Республика етәксеһе билдәләүенсә, аҡсаға дәғүә итеүселәр эшкә һәләтле булыуын раҫларға йә иһә эшкә сыға алмауҙың етди сәбәбен (мәҫәлән, ауырыу, декретта ултырыу һәм башҡалар) күрһәтергә бурыслы. Шул уҡ ваҡытта төп шарттарҙың береһе - күсмә һәм күсемһеҙ милекте баһалау.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, документтар 1 апрелдә ҡабул ителә башлай, уларҙы Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша, шулай уҡ Күп функциялы үҙәк бүлексәләрендә һәм Республика халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалдарында тапшырырға мөмкин (алдан яҙылырға кәрәк). Барлыҡ социаль ярҙам саралары буйынса белешмәне 8(347)200-80-80 күп каналлы телефоны буйынса алырға була (көн һайын иртәнге сәғәт 9-сы яртынан киске 6-сы яртыға тиклем, шәмбе һәм йәкшәмбе - ял).

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЕТЕМДӘРГӘ - ФАТИР



**Әле генә Яңы йыл ине, инде беренсе квартал да тамамланды. Уның һуңғы көнөндә ҡала хакимиәтендә сираттағы оператив кәңәшмә үтте һәм яҡшы хәбәрҙән башланды: ҡала мэры Сергей Греков ошо көндәрҙә 10 етем балаға Кузнецов затоны биҫтәһендәге йорттарҙан фатир асҡысы тапшырылыуы тураһында белдерҙе.**

Әлеге ваҡытта сиратта барлығы 800 етем бала тора, быйыл уларҙың 150-һе торлаҡлы буласаҡ, тип күҙаллана. Шулай уҡ мэр Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың Юғары әҙерлек тураһындағы Указына үҙгәрештәр индерелеүе тураһында ла билдәләп китте. Йәйләп элекке сикләүҙәр алына, хәҙер мәктәп ашханаларын 100 процентҡа тултырырға мөмкин, йәғни балалар график буйынса түгел, ә барыһы бергә туклана ала. Шулай уҡ ата-әсәләргә балалар баҡсаларына инеү ҙә рөхсәт ителә. 1 апрелдән башлап 65 йәштән өлкәндәр өсөн сикләүҙәр алына. Әммә ковидҡа ҡаршы барлыҡ саралар, шул иҫәптән битлек режимы ла һаҡлана.

Кәңәшмәнең төп тәртибенә был аҙнала бер нисә мәсьәлә сығарылды. Уларҙың әлеге ваҡытта иң мөһиме - яҙғы ташҡын осоронда халыҡты һәм территорияларҙы һаҡлау буйынса саралар. Быйыл Ағиҙел йылғаһының - 750, Ҡариҙелдең 780 сантиметрға күтәрелеү ихтималлығы күҙаллана. Шуға ҡарамаҫтан, яҙғы ташҡынға әҙерлек иң насар - һыуҙың 950 сантиметрға тиклем күтәрелеүе мөмкинлеге сценарийы буйынса ойошторола һәм был тема даими контролдә тотола.

Тәбиғәттең насар көнө юҡ, тигәндәй, уның һәр миҙгеле үҙенсә матур, әммә ҡыштың шуныһы бар - барлыҡ сүп-сар, бысраҡлыҡ ҡар аҫтында ятып ҡала һәм күренмәй. Яҙ етеп, ер ҡарҙан әрселә башлау менән барлыҡ территорияны, таҙалап сығырға кәрәк. Был хаҡта ҡала хакимиәтенең Ҡаланың йәшәйешен тәьмин итеү буйынса идаралығының Экология һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау бүлеге начальнигы Ольга Филева сығыш яһаны. Быйыл был сара 29 марттан 30 апрелгә тиклем уҙғарыла, аҙна һайын "санитар йома"лар ойошторола, дөйөм ҡала өмәләре 10 һәм 24 апрелгә планлаштырылған.

Ниһайәт, пандемия арҡаһында туҡталып торған диспансеризация ла ҡабаттан тергеҙелде. Баш ҡаланың "Хужалыҡ иҫәбендәге поликлиника" МУП-ының баш табибы Руслан Солтанов ойошманың ошо йүнәлештәге эшмәкәрлеге менән таныштырҙы. Быйыл диспансеризацияны 2003, 2000, 1997, 1994, 1991, 1988, 1985, 1982 йылғы граждандар, шулай уҡ 40 йәштән өлкәндәр үтә ала (әйткәндәй, был категория йыл һайын тикшерелһә лә була).

Бөгөн республикала эске туризмды үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә. Быйыл иһә Башҡортостан Бөтә донъя фольклориадаһын ҡабул иткәс, ул бигерәк тә иғтибар үҙәгенә сыға. Был тема менән хакимиәттең Эшҡыуарлыҡ, ҡулланыусылар баҙары һәм туризм буйынса идаралыҡ начальнигы Азат Рауилов таныштырҙы. Ул сәнәғәт һәм гастрономия туризмын үҫтереү буйынса эш алып барылыуы, оло йәштәгеләр һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән категория граждандар өсөн "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге. Туризм" проекты тормошҡа ашырылыуы тураһында бәйән итте.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡолаҡ шаулаһа

❖ Ологая бара ҡолаҡ ишетмәүе һәм ҡолаҡ шаулауы баш мейеһе ҡан тамырҙары атеросклерозы башланыуға бәйле, шуға уның менән яфаланыусылар һауа торошона ныҡ һиҙгер була. Атеросклероз булғанда ҡандағы холестериды тикшереп торорға кәрәк. Уның кимәлен кәметеү һәм ҡан тамырҙары һығылмалылығын арттырыу өсөн туҡранбаштан (ҡыҙыл клевер) төнәтмә эшләп эсергә була: 1 литр банкаға ялан туҡранбашының ҡыҙыл сәскәләрен тултырып һалырға, өҫтөнә сығарғансы араҡы ҡойорға һәм ныҡ ябырға кәрәк. Ҡараңғы урында 2 аҙна төнәтергә, даими рәүештә болғатып торорға, аҙаҡтан һөҙөргә һәм сеймалын һығып ташларға. Төнәтмәнең 1 ҡалағын сирек стакан ҡайнатылған һыуға ҡушып болғап, көнөнә бер тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Дауаланыу оҙайлы. Ә ҡолаҡ шауын кәметеү өсөн ваҡ ҡына бүлкәле һарымһаҡ башын һайлап алып, көн һайын бер генә бүлкәһен таҙартып, ас ҡарынға дарыу төймәһе кеүек йоторға, аҙағынан һыу эсеп ҡуйырға. Ошо рәүешле бер ай дауаланырға, кәрәк булһа, бер аҙнанан тағы ҡабатларға була.

### Бил ауыртһа

❖ Бил ауыртҡанда һалҡын һыу менән иртәле-кисле ҡойоноу яҡшы ярҙам итә. Әммә тәнде сыныҡтырыу өсөн тәүҙә йылы һыу менән ҡойона башлап, йәйләп һалҡын һыуға күсергә кәрәк.

### Йүтәл

❖ Татлы тамыр (солодка) йүтәлде бөтөрөргә һәм ҡаҡырыҡты сығарырға ярҙам итә. 1-2 ҡалаҡ ваҡланған татлы тамырға 1,5 стакан һыу ҡойоп, талғын утта 7-10 минут ҡайнатырға, өҫтөн яҡшы ҡаплап, һыуытырға ҡуйырға. Шунан һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 1-2-шәр ҡалаҡ эсергә.

### Йөрәк ауыртһа

❖ 1 ҡалаҡ шыйыҡ бал, 45-әр тамсы корвалол, валокордин, арыҫлан ҡойроғо, валериана, энәлек төнәтмәләрен ҡушып, яҡшы болғарға. Йөрәк ауыртҡанда күкрәк аҫтына һөртөргә. Йөрәк сәнсеп ауыртҡанда уның тапҡырына борсло пластырь йәбештереп ҡуйырға була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Нишләптер беҙҙең телсе ғалимдар урыҫ теленә башҡорт теленән ингән һүҙҙәр тураһында яҙмайҙар. Ә бит башҡорт ҡына урыҫтан алмаған, урыҫ халҡы ла башҡорттан әллә күпме һүҙ үҙләштергәндер, тип әйтә алабыҙ.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Киндер кесерткән кеүек эшкәртелгән. Көньяҡ башҡорттар талҡышты (костра) айырыу өсөн һабаҡтарҙы бүрәнә йәки ташҡа һалып туҡмаҡ менән йомшартҡандар. Шулай уҡ бер яғына уйым эшләнгән бүрәнә рәүешендәге арҡыры килеләр ҙә ҡулланылған.



*Киндер һабаҡтарын эшкәртеү өсөн киле (БР Архангел районы Терекле ауылы). И.Ф. Кибальник һүрәте. 1975*



*Көнйәләнән еп әҙерләгәндә ҡолғаға беркетелә торған ҡаба*

Көнйәләне (кудель) тимер шыртлы киң щетка менән теткәндәр, иләгәндә уны ҡаба аша үткәргәндәр. Тәбәлдерекле тар шөйтөлө көньяҡ урынағасында һуҡҡандар. Туҡыу өсөн бер ҡат еп алынған. Әҙер туҡыманы ағас көлө һалынған һыуҙа ҡайнатып, ҡояшҡа элеп киптереү ярҙамында ағартҡандар. Асыҡ төҫтәге туҡымалар таҫтамал, ҡулъяулыҡ, таҫтар, яулыҡ, ирҙәр күлдәге, эске кейем тегеү өсөн ҡулланылған. Әммә буялған туҡыма көнкүрештә күберәк ҡулланылған. Йорт эсен дә төрлө төҫлө итеп йыһазлағандар, халыҡ та сағыу кейемгә өҫтөнлөк биргән. Ҡыҙыл, күк, ҡыҙғылт һары, йәшел төҫтәге туҡыманан ҡатын-ҡыҙҙар күлдәге, яҫтыҡ тышы, шаршау, япма һәм түшәместәр теккәндәр. Ҡайһы берҙә әйберҙе төрлө төҫтәге туҡыма киҫәктәренән орнаментлап эшләгәндәр. Көньяҡ һәм көнсығыш башҡорттарында туҡыусылыҡ эшенең төп үҙенсәлеге - етен епте әҙ ҡулланыу. П. И. Небольсин XIX быуатта башҡорттар араһында булып, етен күп сәсеп үҫтерелмәүен уны эшкәртеү традициялары юҡлығы менән бәйләп аңлата. Ул көньяҡ кантондарҙа етен сәсһәләр ҙә, "бик әҙ күләмдә сәселә; халыҡ ауылдарҙа иркен үҫкән киндерҙе ҡулланыуҙан ҡәнәғәтләнеп йәшәй" тип яҙа. Тикшеренеүсе халыҡтың ҡулдан һуғылған туҡыма менән тәьмин ителешен уртаса иҫәпләп сығарып күрһәтә: ябай ғаилә дүрт бот тирәһе ҡыр киндерен йыйып ала, "йөҙ аршин (1 аршин - 71,12 см) тирәһе тупаҫ, әммә ныҡ туҡыма" әҙерләй. Бот ярым киндер орлоғо сәсеп, 3 бот тирәһе сүс алалар, тағы ла 100 аршин туҡыма эшләрлек...

Халыҡ оҙаҡ осор киндер туҡымаға өҫтөнлөк биргән. Баҫа киндеренән (посконь) йола өсөн кейем тегергә тырышҡандар, шул иҫәптән туй өсөн дә. Таҫтар һәм һарауыстар өсөн аҡ туҡыманы ҡайығандар. Ғаиләләрҙә кәрәкле тиклем туҡыма киҫәге кәфенлек өсөн һаҡланған. Кизе - етен һәм кизе-мамыҡ ептән туҡылған туҡыма, күпселек осраҡта таҫтамал һәм ашъяулыҡ өсөн ҡулланылған.

Көньяҡта етештерелгән туҡымаларҙың киңлеге йөн туҡымаларҙыҡы кеүек үк, ҙур булмаған. И.Г. Георги тар кесерткән туҡымалар тураһында яҙып ҡалдырған. Киндер туҡыманан булған боронғо таҫтамал, таҫтар һәм һарауыс, сәлләләр киңлеге 28-ҙән 32 сантиметрға тиклем еткән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

**Урыҫтарҙың ниндәйҙер бер нәмәнең бәҫен күтәрер өсөн "это тебе не хухры-мухры", тигәнен күптәр ишеткәне барҙыр. Мин ҡайһы саҡта ҡыҙыҡһынып, шулай тигән кешенән: "Нимә була ул "хухры-мухры"?" - тип һорағаным бар. Тик берәүҙең дә миңә был һүҙҙең мәғәнәһен аңлата алғаны юҡ. Шул уҡ ваҡытта, "Это тебе не хухры-мухры" тигәнде ишеткән кеше, быны әйткән кешенең нимә әйтергә теләгәнен (яҡынса булһа ла) дөрөҫ аңлай. Тик айырым "хухры-мухры" нимә була икәнен генә белмәй.**

# "ХУХРЫ МУХРЫ" НИМӘ БУЛА?



Урыҫ телендә төрки телдәренән һүҙҙәрҙең бик күп булыуын иҫтә тотоп, был һүҙ төрки телдәренәндер, тип уйлап, "хухры-мухры" һүҙенең мәғәнәһен үҙебеҙҙең телдән эҙләп ҡарарға булдым. Һәм ысынлап та, оҡшаш һүҙ табылды. Баҡтиһәң, был "хухры-мухры" беҙҙең башҡорт телендәге "кәкре-бөкөрө" һүҙенең урыҫ телендәге боҙоҡ варианты ғына икән. Бына урыҫ телендәге "Это тебе не хухры-мухры" урынына "Это тебе не кәкре-бөкөрө" тип әйтеп ҡарағыҙ әле, шул уҡ мәғәнә килеп сығасаҡ. Тимәк, урыҫ телендәге "хухры-мухры" һүҙе ысынлап та төрки телдәренән үҙләштерелгән һүҙ булып сыға. Аныҡ ҡына әйткәндә, башҡорт теленән ингән һүҙҙер. Ваҡыт үтеү менән был "кәкре-бөкөрө" тигән һүҙ урыҫ тел ҡанундарына буйһоноп, яңғырашын үҙгәрткән һәм "хухры-мухры" булып киткәндер, тип уйларға төплө сәбәптәр бар кеүек.

Нишләптер беҙҙең телсе ғалимдар урыҫ теленә башҡорт теленән ингән һүҙҙәр тураһында бигүк яҙмайҙар. Ә, уйлап ҡараһаң, биш быуат тиерлек әүҙем ҡатнашып йәшәп, башҡорт ҡына урыҫтан алмаған, ә урыҫ халҡы ла башҡорттан әллә күпме һүҙ үҙләштергәндер, тип әйтә алабыҙ. Башҡорттар бик ҙур ерҙәрҙе биләп, ошо ерҙәргә күсеп килеп ултырған урыҫ халҡы менән алыш-биреш итеп, ҡатнашып йәшәгән. Ҡатнашҡас инде, һүҙҙәр ҙә телгә инә башлай. Элек башҡорт менән урыҫ араһында "знакумлыҡ" тигән бик матур күренеш булған. Был йола буйынса, башҡорттар ниндәйҙер йомош менән урыҫ ауылына барһа, үҙҙәренең урыҫ знакумдарында туҡтағандар һәм, киреһенсә, урыҫтар башҡорт ауылында шулай уҡ знакумдарына туҡтаған.

Мәскәүгә фольклорсылар конгресына барып, ҡунаҡханаға урынлашырға йөрөгәндә эргәмә бер урыҫ милләтле фольклорсы килеп: "Һин башҡортмы?" - тип һораны һәм ыңғай яуап алғас: "Әйҙә, бер бүлмәгә урынлашайыҡ, исмаһам, кисен иркенләп һөйләшеп ултырырбыҙ", - тигән тәҡдим яһаны. Бер бүлмәгә урынлашып, танышып һөйләшеп киттек. Был ғалим сығышы менән Ырымбур өлкәһенән булып, йәштән Ленинград ҡалаһына уҡырға китеп, шунда төпләнеп ҡалып, оҙаҡ ҡына Питерҙа йәшәй икән. Бала сағында ҡартатаһына эйәреп, Ырымбур өлкәһенән күршелә генә ятҡан Башҡортостандағы бер ауылға ҡартатаһының знакумдарына ҡунаҡҡа барғандарын, башҡорттар менән татыу йәшәгәндәрен иҫләп ултырҙы. "Ҡартатайым бал эсеп, әҙерәк иҫереп, арбаға ҡырын төшөп ятып, урыҫса йырҙарҙы йырлап килә-килә лә, башҡорт ауылына яҡына башлау менән башҡортса йырҙарға күсә ине", - тип көлөмһөрәп иҫләп ултырҙы ҡартатаһының мәҙәктәрен. Башҡортса йырларға күсеүен: "Сынок, без друзей нельзя, а мои друзья башкиры-знакумы, надо их уважать, им тоже будет приятно, если я пою их песни. Они же наши песни поют когда приезжают ко мне в гости", - тип аңлатҡан. Ҡартатаһының ошо ҡыҙыҡ ғәҙәтен һөйләп, был танышым: "Ана бит, ниндәй матур йолалар булған элек, бер-береһенә ниндәй ихтирам ине был ике ҡартта", - тип йәш сағын һағынып иҫләп ултырҙы.

Шундай матур, ихтирамлы аралашыуҙар булғанда, әлбиттә, телдән-телгә һүҙҙәр ҙә күскәндәр. Һәм "хухры-мухры" тигән һүҙ шундай аралашыуҙарҙың бер эҙелер, тип әйтергә була.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# СӘСТӘРЕГЕҘ СӘСКӘ БӘЙЛӘНГӘН,

## йәки Бер фразеологизмдың тарихы тураһында

**Туй-никахтарҙа кейәү менән кәләште "хәҙер инде сәстәрегеҙ сәскә бәйләнде" тип ҡотлауҙарын йыш ишетергә мөмкин. Был һүҙҙәр хәҙерге башҡорт телендә ғаилә ҡороу, өйләнеү йә кейәүгә сығыу тигәнде аңлата. Әммә уның ҡайҙан килеп сығышына берәү ҙә артыҡ иғтибар иткәне юҡ, буғай.**



Был фразеологизмдың тарихы боронғо дәүерҙәргә барып тоташа. Мәҫәлән, боронғо төрөктәрҙең (ҡытайҙар уларҙы тукюэ тип атаған) ҡатын-ҡыҙҙары ғына түгел, ирҙәре лә оҙон сәс йөрөткән. Ирҙәр хатта, күп сығанаҡтар буйынса, сәстәрен үрер ҙә булған. Был Урта Азия, Монголия, Тыва, Алтайҙа осраған балбалдарҙа ла сағылыш тапҡан. Ҡытай, әрмән, византия тарихсылары үҙ әҫәрҙәрендә был турала яҙып та ҡалдырған. Мәҫәлән, VII быуатта йәшәгән әрмән тарихсыһы Моисей Каганкатваци бер урында, төрөк һуғышсыларының сәстәре үрелгән, тиһә, икенсе урында, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы һымаҡ таратылған, тип яҙып үткән. Ирҙәрҙең сәстәре үрелгән йә иһә таратылған булғанмы - беҙҙең өсөн әллә ни әһәмиәте юҡ (был турала фәнни дискуссия әле лә бара). VI-VIII быуаттарҙа Беренсе һәм Икенсе төрөк ҡағанаттары төҙөгән боронғо төрөктәрҙең ирҙәре оҙон сәс йөрөтөүен генә билдәләп үтеү мөһим.

Үҙәк Азияла көн иткән боронғо төрөк халыҡтарында туйҙарҙың нисек үтеүе хроникаларҙа ентекле теркәлмәгән, әлбиттә. Әммә кейәү менән кәләштең туй ваҡытында сәстәрен бер-береһенә бәйләү йолаһы булыуы шик тыуҙырмай. Был йола аҙаҡ башҡорт халҡының этногенезында ҡатнашҡан ырыу-ҡәбиләләрҙә лә булғандыр, тип уйлар кәрәк. Ул ырыуҙар Үҙәк Азиянан сыҡҡан, тарихи септәр уларҙы боронғо төрөктәр менән бәйләй. Әлбиттә, Ислам ҡабул итеү менән был йола яйлап юҡҡа сыҡҡан, әммә "сәстәрегеҙ сәскә бәйләнде" тигән фразеологизм телдә һаҡланып ҡалған.

Исламды ҡабул итмәгән ҡайһы бер төрки халыҡтарында кейәү менән кәләштең сәстәрен бер-береһенә бәйләү йолаһы беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, тыва халҡында кәләште һоратҡандан һуң туйҙың икенсе этабы тухтеп (тухтээр, "нығытыу" мәғәнәһендә) тип атала. Ҡыҙ яғында, өйҙә йәштәрҙе кейеҙгә ултыртып, уларҙың толом сәстәренең (тываларҙа беҙҙең көнгә тиклем ирҙәр ҙә сәсен үрә) остарын тарап, бер-береһенә бәйләгәндәр. Шунан кейәү менән кәләш бер-береһененң сәстәрен танырға тейеш булғандар. Әгәр ҙә дөрөҫ әйтһәләр, никах бәхетле була, тип юрағандар. Шунан ғына уларҙы ҡауыштырғандар. Хакастарҙа был йола бер ни тиклем үҙгәргән килеш һаҡланған. Уларҙа иһә кәләштең толомона үрер өсөн кейәүҙең сәсен аҙыраҡ киҫеп кенә биргәндәр. Кәләш кейәүҙең сәсен туйҙан һуң гел үҙ сәстәренә ҡуша үреп йөрөргә тейеш булған. Толомдарҙы бер-береһенә үреү йәштәрҙең яҙмышы бер бөтөнгә әйләнеүен аңлатҡан.

Был билдәле фразеологизмдың һаҡланып ҡалыуы, уның телдә киң ҡулланылышы башҡорт ырыу-ҡәбиләләре тарихының VI-VIII быуаттарында Үҙәк Азияла көслө дәүләттәр төҙөгән боронғо төрөктәргә (тукюэ) барып тоташыуын билдәләүсе тағы бер дәлил булып тора, ти уйларға кәрәк.

**Шамил ИҪӘНҒОЛОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

✓ *Генерал-лейтенант Х.-Ә. Ишбулатов Башҡорт дивизияһы начальнигы вазифаһында ҡала. Башҡорт милли частары Колчак армияһы составында тарҡалыуҙан ҡотолоп, йәш Башҡорт автономияһының хәл иткес көсөнә әүерелә.*



ЙӘШӘГӘН БИТ ШӘХЕСТӘР!

# ГЕНЕРАЛ ЯҘМЫШЫ:

## Хаджи-Әхмәт Ишбулатов



Февраль революцияһынан һуң, Рәсәй армияһында 1917 йылда тарҡалыш процестары башлана, күп кенә частарҙа һалдаттар һәм матростар командирҙарын ҡыуып ебәрәләр, туҡмайҙар, хатта юғары чиндағыларын атып үлтереү осраҡтары була. 1917 йылдың яҙында Бәләбәйҙә лә һалдаттар араһында дисциплина насарая, шуға күрә генерал Ишбулатовҡа Бәләбәй гарнизоны һалдаттары менән дә командалыҡ итеү бурысы йөкмәтелә. Әммә бында алдан һис бер көтөлмәгән хәл килеп тыуа. 5 майҙа Бәләбәй властары шарап һәм араҡы складтарында бик ҙур күләмдә тупланған алкоголле эсемлектәрҙе утилләштерергә була, сөнки башҡа ҡалаларҙа һалдат һәм матростарҙың ошондай складтарға һөжүм итеү осраҡтары күҙәтелә. Әммә власть әһелдәре үтә вайымһыҙ һәм һаҡһыҙ эш итә: шарап-араҡы тултырылған мискәләрҙе урамға алып сығып, халыҡтың күҙ алдында юл буйына түгә башлайҙар. Ошо хаҡтағы хәбәр йәшен тиҙлегендә бар ҡалаға тарала. Бәләбәй гарнизоны һалдаттары ла, казармаларынан сығып, урам буйлап аҡҡан шарап шишмәләренән ауыҙ итә тәүҙә. Шунан инде араҡы шауҡымынан ҡыҙып алған ҡораллы һалдаттар, һаҡсыларҙы ҡыуып ебәреп, шарап складтарына бәреп инә, ҡалала вакханалия башлана. Урамдар буйлап һибелгән иҫерек һалдаттар лавкаларҙы емерә, ҡала кешеләрен туҡмай, талай. Әлбиттә, шарап запастары бөтөүгә, һалдаттар бер ни тиклем тыныслана бирә, әммә улар ҡылған законһыҙ ғәмәлдәре өсөн бер ниндәй яуаплылыҡҡа тарттырылмай. Һалдаттар бөтөнләйгә контролдән сыға. Шундай аянысла хәлдә лә Хаджи-Әхмәт Ишбулатов үҙенең полкы һәм Бәләбәй гарнизоны командиры вазифаһын ташлап китмәй: күрәһең, һалдат массалары араһында генералдың абруйы ҙур була, уға ҡул менән дә, һүҙ менән дә янаусылар булмай. Һуңынараҡ генерал 1-се мосолман бригадаһын ойоштороу маҡсатында Ҡаҙанға саҡырыла, әммә был эш уңышһыҙ тамамлана, сөнки Ваҡытлы Хөкүмәт мосолман хәрби частарын төҙөүгә ҡаршы була.

Октябрь аҙаҡтарында Рәсәйҙә власҡа большевиктар килә, элекке батша армияһы частары таратыла. Бәләбәйҙәге 152-се запас пехота полкы һалдаттарына ла өйҙәренә ҡайтып китергә рөхсәт ителә, уның командиры Х.-Ә. Ишбулатов тыуған ауылы Өйҙөрәкбашҡа юллана.

Ғүмеренең һуңғы йылдарында, бөтөн Рәсәйҙе солғап алған Граждандар һуғышы шарттарында, беренсе Башҡорт республикаһының яҙмышы хәл ителгән осорҙа, генерал Ишбулатов та ошо сәйәси ваҡиғаларҙан ситтә ҡалмай. Ә.-З. Вәлиди һәм уның арҡаҙаштары тарафынан ойошторолған Башҡорт хөкүмәте ағзалары, 1918 йылдың апрелендә Ырымбур төрмәһенән азат ителгәс, адмирал Колчак армияһы командованиеһы менән бәйләнешкә инеп, Силәбелә айырым башҡорт ғәскәрен төҙөү пландарын ғәмәлгә ашыра башлай.

Ә.-З. Вәлиди етәкләгән Башҡорт хәрби шураһы 1918 йылдың июнендә Башҡорт хөкүмәте исеменән милли ғәскәр составына мобилизация иғлан итә. Башҡорт ғәскәре штабы 12 мең һалдаттан торған ике пехота дивизияһы һәм бер атлы бригада төҙөргә ниәт итә. Йәй аҙаҡтарына 5 пехота полкы, 2 атлы полк һәм унлаған хәрби милиция отрядтары барлыҡҡа килә. Улар, Екатеринбург фронтында барған һуғыштарҙа ҡатнашып, юғары баһаға лайыҡ булһа ла, Колчак ғәскәре етәкселеге уларҙы үҙ ҡарамағында ғына тоторға тырыша, берҙәм башҡорт армияһын булдырыуҙы хупламай. Ә.-З. Вәлиди бер үҙәктән идара ителгән берҙәм Башҡорт ғәскәри корпусын төҙөү ниәтенән ваз кисмәй, 1918 йылдың августа аҡтарҙың монархик ҡарашлы Себер хөкүмәтен өнәп бөтмәгән Комуч етәкселәре (Һамар ҡалаһында) менән килешеүгә өлгәшә, һәм 7 сентябрҙә ике пехота дивизияһы һәм 1-се атлы полк нигеҙендә Айырым Башҡорт корпусы хасил була. Башҡорт хәрби шураһы рәйесе Ә.-З. Вәлидов үҙенең арҡаҙаштары алдында ғәскәри командирҙар вазифаһына хәрби тәжрибәһе булған мосолман офицерҙарын йәлеп итеү бурысын ҡуя.

Генерал Х.-Ә. Ишбулатов, 10 июлдә үк Башҡорт хәрби шураһы тарафынан башҡорт дивизияһы командиры вазифаһына тәғәйенләү өсөн Силәбе ҡалаһына килергә саҡырыу алһа ла, уны ҡабул итмәй. Ул тәүге осорҙа айырым башҡорт ғәскәрен булдырыу идеяһына ышанып етмәй. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, Ә.-З. Вәлиди Өйҙөрәкбашҡа, генерал Ишбулатов менән осрашып һөйләшеү ниәте менән, билдәле шағир, үҙенең тоғро арҡаҙашы Шәйехзада Бабичты ебәрә. Шағир менән генерал электән үк таныш булалар. Һөҙөмтәлә 1918 йылың 7 сентябрендә Х.-Ә. Ишбулатов Ырымбурға килеп етә, ул Айырым Башҡорт корпусы командиры вазифаһында хәрби хеҙмәтен дауам итергә ризалыҡ бирә. Генералға ғәскәр менән идара итеү өсөн ярҙамға бер нисә рус офицеры ла йәлеп ителә. Ул, тиҙ арала башҡорт полктарының хәрби әҙерлеген тикшереп, уларға яҡшы баһа бирә. Сентябрь аҙаҡтарында - октябрь баштарында башҡорт полктарының ҡаһарманлығы Орск ҡалаһы эргәһендәге алыштарҙа командование тарафынан юғары баһаға лайыҡ була. 17 октябрҙә генерал-лейтенант званиеһы бирелгән комкор Ишбулатов башҡорт яугирҙарына ошолай мөрәжәғәт итә: "Башкурдистандың дан ҡаҙанған воиндары! Хәрби эштәрегеҙҙең ҡыҫҡа ғына бер осоронда һеҙ үҙегеҙҙең азаматлығығыҙ һәм ныҡ тороуығыҙ менән хөрмәт үә маҡтауға лайыҡ булдығыҙ. Һеҙгә өлгәшелгән уңыштарығыҙ өсөн ысын йөрәктән рәхмәт белдерәм, һеҙҙең башлығығыҙ булыуым менән ғорурланам".

Генерал айырым башҡорт полктарын бер территорияға туплау маҡсатын ҡуя, ҡыҙылдарға ҡаршы фронтта төрлө йүнәлештәрҙә хәрәкәт иткән иң яҡшы башҡорт ғәскәрҙәренең тиҙ арала һәм аҫтыртын рәүештә юҡ ителеү хәүефе хаҡында Әхмәтзәки Вәлидовҡа ла тураһын әйтә. Ысынлап та, үҙен Рәсәйҙең Юғары хакимы итеп иғлан иткән адмирал Колчак армияһының Юғары Баш командованиеһы штабы 1918 йылдың 17 октябрендә Башҡорт корпусын таратыу хаҡында бойороҡ бирә. Башҡорт ғәскәре башлыҡтарының ризаһыҙлығы бер нисек тә иҫәпкә алынмай. Өфө ҡалаһында большевиктар власына ҡаршы көрәшкән көстәр тарафынан ойошторолған Ваҡытлы хөкүмәт - Директория ла ошо ҡарарҙы хуплап сыға. Башҡорт ғәскәренән Колчак командирҙарына буйһоноулы бер генә дивизия ҡалдырылыу ҡарала.

Һамар Комучының ҡайһы бер ағзалары ҡатнашлығында Ырымбурҙа Колчакҡа ҡаршы ҡораллы ихтилал да планлаштырыла, әммә был план хаҡында ҡаршы яҡҡа ла хәбәр итеп өлгөрәләр, һөҙөмтәлә Ырымбурҙағы аҙ һанлы башҡорт яугирҙары ҡаланы ҡалдырып китергә мәжбүр була. Ошо арала генерал Ишбулатов, Вәлидовтың бойороғона ярашлы, барса башҡорт полктарын Ырымбур һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары араһындағы киң арауыҡта туплауға өлгәшә. Башҡорт ғәскәре Колчак командованиеһына буйһоноуҙан баш тарта. Генерал-лейтенант Х.-Ә. Ишбулатов декабрь урталарына тиклем формаль рәүештә Башҡорт дивизияһы начальнигы вазифаһында ҡала, һуңынан Башҡорт ғәскәри идаралығы ҡарамағына күсерелә. Шулай итеп, Башҡорт милли частары Колчак армияһы составында тарҡалыуҙан ҡотолоп, йәш Башҡорт автономияһының хәл иткес көсөнә әүерелә.

Башҡорт ғәскәре 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сыға. 20 мартта Үҙәк Совет власы менән Башҡорт Хөкүмәте араһындағы Килешеү нигеҙендә Башҡорт Совет автономияһы иғлан ителгәндән һуң да генерал Х.-Ә. Ишбулатов эшмәкәрлеген дауам итә, ул Башхәрбиревкомдың хәрби комиссары Ә.-З. Вәлидовтың хәрби эштәр буйынса ярҙамсыһы вазифаһында эшләй. Ул, сирләп китеп, 1921 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында 70 йәшендә вафат була.

Уның балаларының яҙмышы ла илдә булып уҙған ваҡиғалар менән бермә-бер бәйле була. Оло улы Сәйетгәрәй Өфө янындағы Мотор заводында (хәҙерге УМПО) эшләй, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, "Ҡыҙыл Йондоҙ" ордены, хәрби миҙалдар менән бүләкләнә. Генералдың икенсе улы Рөстәм, атаһы кеүек үк, хәрби карьера юлын һайлай, 1928 йылда хәрби-диңгеҙ училищеһын тамамлай. Өсөнсө рангылағы капитан званиеһында Ҡара диңгеҙ флотында һыу аҫты кәмәләре дивизионы командиры вазифаһын биләй. Әммә 1937 йылда "хәрби-фашистик заговор"ҙа ҡатнашыуҙа ғәйепләнеп, хәрби трибунал ҡарары менән 1938 йылда үлем язаһына хөкөм ителә. 1967 йылда СССР Юғары Судының Хәрби коллегияһы ҡарары менән реабилитациялана. Генералдың Миәссәр исемле ҡыҙы Мәскәүҙә медицина институтының 2 курсын тамамлағас, Ҡырымға китә, һуңынан Башҡортостанға ҡайтып йәшәй, тормошҡа сығып, өс бала әсәһе була.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ.**
**(Тарих фәндәре кандидаты Рөстәм Таймасов материалдары нигеҙендә әҙерләнде.**
**Аҙағы. Башы 13-сө һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай һинең улдарың, Урал

Сталинград ҡыйралышының хәл иткес икенсе этабы алдынан, 1942 йылдың сентябрендә, бында тупланған резерв ғәскәрҙәрен барлау, фронт хәлдәре менән яҡындан танышыу маҡсатында Юғары Башкомандующий урынбаҫары Г.К. Жуков һәм Генераль штаб начальнигы А.М. Василевский Сталинград фронтына килә. Дон һәм Волга арауығында һуғыш хәрәкәттәре алып барған дошман армияһын ҡамап алып юҡ итеү планы - "Уран" стратегик операцияһына һуңғы әҙерлек эштәре ғәмәлгә ашырыла. 1942 йылдың 13 ноябрендә контрһөжүм планы Юғары Башкомандующий И.В. Сталин тарафынан раҫлана.

1942 йылдың 19 ноябрендә иртә таңдан Дон далалары меңәрләгән орудиеларҙан атылып сыҡҡан снарядтар геүләүе, уларҙың шартлауынан хасил булған ҡеүәтле канонада ауазына күмелә. Ҡыҙыл Армияның контрһөжүме шулай башлана. 8-се кавалерия корпусы составында һуғыш хәрәкәттәренә ҡушылған 112-се Башҡорт атлы дивизияһы Тюкановский - Котовский - Большой - Блиновский - Старосинютино - Пронин тораҡ пункттары (хәҙерге Волгоград өлкәһе территорияһына ҡараған утарҙар) маршрутына ярашлы румын пехотаһы һәм немецтарҙың танк частары биләгән позицияларға һөжүм итеп барып, Старопронино районында дошманды тар-мар итеп, артабан немец ғәскәрҙәрен тәьмин итеүҙә стратегик роль уйнаған Обливская станцияһына бәреп инеү маҡсаты ҡуйыла.

8-се кавкорпус атлылары дошман фронтын йырып кереү бурысын үтәүсе 1-се танк корпусы артынан бара.

Әммә бында тәүге мәлдәрҙә барыһы ла алдан планлаштырғанса булмай. Беҙҙең 1-се танк корпусы дошмандың 22-се танк дивизияһының көслө ҡаршылығына осрай, ә уның артынса һуғышҡа ингән 8-се кавкорпусҡа Блиновский һәм Усть-Медведицкий хуторҙары рубежында 1-се румын король танк дивизияһы менән алышҡа инергә тура килә.

112-се Башҡорт атлы дивизияһының авангардында барған 275-се полк (командиры подполковник Т. Кусимов) Блиновский утары янында дошмандың нығытмалы көслө оборона пунктына юлыға. Таһир Кусимов, 313-сө атлы полк командиры Ғариф Макаев менән кәңәшләшеп, һөжүмде бергәләшеп ойошторорға була. Йәйәүле эскадрондар, төнгө ҡараңғылыҡты файҙаланып, утарға бәреп инә. Өлкән лейтенанттар Бәҙри Мәмбәтҡолов һәм Ғ.В. Вахитов эскадрондары айырыуса ҡыйыулыҡ күрһәтә, баҫап ҡалған румын һалдаттары, позицияларын ҡалдырып, ҡасыу яғын ҡарай. Дошмандың 8 орудиеһы, 3 пулемёты, артиллерия һәм аҙыҡ-түлек складтары беҙҙең яугирҙар ҡулына эләгә. Әммә дошман, Блиновский утарының көньяғында һәм уға яҡын бер ҡалҡыулыҡта нығынып, беҙҙең яугирҙарға ҡаршы торор өсөн өҫтәмә көстәр йәлеп итә.

Генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов, дивизияның разведка бүлеге начальнигы Мәсрүр Гуловтан алынған мәғлүмәткә таянып, алышты дауам итеү планын ҡора. Дошман бынан йыраҡ булмаған Карасево утары яғынан килтерелгән көстәр ярҙамында ҡаршылыҡ күрһәтергә ниәтләй. Комдив Т. Кусимовҡа Блиновский утары аръяғындағы ҡалҡыулыҡтарҙа тупланған дошман подразделениеларын атакалап, юҡ итергә бойора, ә башҡа яугирҙар (атһыҙ ҡалған яугирҙарҙан майор Фәйзи Ғафаров командалығында айырым "йәйәүле полк" хасил ителә) утарҙың көньяғындағы дошман көстәренә һөжүм итергә тейеш була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# ХАЛҠЫБЫҘ ИМЕНЛЕГЕ

**Уҡыусыларыбыҙға күренекле дәүләт эшмәкәре, хоҡуҡ белгесе, Башҡортостан Республикаһы Конституция Суды рәйесе, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, юридик фәндәр докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған юрисы, Салауат Юлаев ордены кавалеры Зөфәр Ирғәле улы ЙӘНЕКӘЕВ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**▸ Зөфәр Ирғәле улы, һеҙ ғүмерегеҙҙең етмеш йәш баҫҡысына аяҡ баҫтығыҙ. Етмеш йыл – кеше ғүмеренең нигеҙендә ғүмерҙең бер дәрәжәһенә, кимәленә барып етеү мәғәнәһе лә ята. Ошо юғарылыҡтан сығып ҡарағанда үткән йылдарығыҙ нисек күренә, ҡайһы мәлдәрегеҙҙе иң бәхетлеһе тип атар инегеҙ?**

- Хоҙайға шөкөр, тормошомда бәхетле мәлдәрем күп булды. Балалыҡ, үҫмер йылдарымдың ниндәй генә ауырлыҡтары булмаһын, атай-әсәй ҡуйынында үҫкәс, барыбер бәхетле инем. Беренсенән, мин бик дан ҡартатайҙарҙың ейәне булдым. Әсәйемдең атаһы Ғәйзулла ҡартатайым революцияға тиклем Берлинда йәшәгән һәм шунда ветеринарға уҡып, 1923 йылда тыуған иленә әйләнеп ҡайтҡан. Немец телендә бик матур һөйләште. Ни өсөндөр беҙ унан был телде өйрәнергә диҡҡәт итмәгәнбеҙ - шуныһы ғына үкенесле. Ғәйзулла ҡартататы Баймаҡҡа күсте. Тап ошо интернатта уҡыу тормошомдо ғилем, фән юлына борҙо ла инде. Туғыҙынсы класҡа еткәс, юрист булам, тигән хыял барлыҡҡа килде.

**▸ Ниңә фәҡәт ошо һөнәрҙе һайларға булдығыҙ һуң?**

- Йәшлек романтикаһы көслө булғандыр инде. Шерлок Холмс, Джеймс Бонд, комиссар Мегре тураһында китаптар уҡый инем. Урыҫ телен яҡшы белдем, тип әйтә алмайым. Шулай ҙа туғыҙҙа уҡығанда ҡулыма "Урыҫса-башҡортса һүҙлек" алып, бер ай самаһы Толстойҙың "Һуғыш һәм солох" романын уҡып сыҡтым. Ҡалған әҫәрҙәрен һүҙлекһеҙ ҙә һыу кеүек эстем. Чернышевскийҙың "Что делать?" романындағы үҙен инҡилапсы итеп тәрбиәләгән Рахметов образы әсир итте.

**▸ Рахметов һымаҡ, ҡаты түшәктә йоҡлап ҡараманығыҙмы?**

культеткa инергә бер генә балл етмәне, киске факультетта уҡырға мөмкинлек биргәйнеләр, ризалашмай, ҡайтып китте. Ул бик белемле егет ине. Ҡайтҡас, Өфө дәүләт авиация институтына уҡырға инде. Беренсе курста уҡығанда ул миңә Свердловск ҡалаһына посылка менән еҙ ҡурай ебәрҙе. Шул ҡурайҙа студенттар араһында уйнап, күңел аса инек.

Беренсе курста, май байрамдарында Өфөгә Баймаҡ районы студенттарының яҡташтар ойошмаһы йыйылышына, ул ваҡытта Сәфәрғәли Йөнтүрин етәксе ине, Свердловск өлкәһенән Башҡортостан студенттары ойошмаһы президенты булараҡ килдем. Яланға сығып, һабантуй үткәрҙеләр. Унда Буранбай дуҫым менән осрашып, авиация институтының дөйөм ятағында төнө буйы һөйләшеп сыҡтыҡ. Шунда ул миңә: "Техник һөнәр мине ҡыҙыҡһындырмай, минең шиғырҙар яҙғым, яҙыусы булғым

Ғилми эшмәкәрлегемә килгәндә, ул йүнәлеш һәр ваҡыт заман проблемалары менән бәйле барҙы. Әйтәйек, кандидатлыҡ диссертацияһы темам экологияға бәйле булғас, мин тирә-яҡ мөхитте ҡыйратыуҙы етештереү технологиялары шарттарын боҙоу һөҙөмтәһе тип кенә алдаша алмай инем. Нимә генә тимә, бигерәк тә совет осорондағы экологик һәләкәттең нигеҙендә теге йәки был төбәк граждандарының хоҡуҡтары боҙолоуы ятҡанын күҙһеҙ лә күрер, һуҡыр ҙа ишетер. Шуға күрә, "Быуаттан - быуатҡа" тигән китабымда мин ғүмеремдең был өлөшөн "Тәбиғәтте һаҡлауҙан - сәйәсәткә" тип атаным. Үткән быуаттың һикһәненсе йылдар аҙағындағы, туҡһанынсы йылдар башындағы илебеҙҙәге киң билдәлелек, үҙгәртеп ҡороуҙар еле һөҙөмтәһендә минең сәйәсәттән дәүләт хеҙмәтенә килеү ваҡиғалары докторлыҡ диссертацияһы темаһына әйләнде.

**▸ Һеҙҙең менән үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап аралашабыҙ, һәр ваҡыт бер сифатығыҙға ҡарап һоҡланам: ул да булһа, ниндәй генә ситуация, йым", - тигәйнегеҙ. Шул фекерегеҙҙе аныҡлап китегеҙ әле? Бында "Ҡулымдан килмәгән нәмәгә тотонмайым", тигән аңлау ҙа ята шикелле. Шулай түгелме?**

- Эйе, бында шулай уҡ "Оҫта барҙа, ҡулыңды тый, сәсән барҙа, телеңде тый" тигән аңлау ҙа бар. Шуға күрә, ысынлап та, ҡурайҙа кеше алдында уйнамайым. Дәүләт эштәре, ғилми конференциялар менән сит илдәргә сыҡҡанда ҡурайымды алып йөрөйөм. Улар ҡурайҙы күргәндәрә булмағас, экзотика булараҡ, мин ситтә "ҡурайсы", икенсерәк итеп әйткәндә "сәйәсмәндәр араһында иң яҡшы ҡурайсы, ҡурайсылар араһында иң яҡшы сәйәсмән".

**▸ Ошоларҙан сығып тағы ла бер һорау: ҡурайсылар алдында ҡурай уйнамаған һымаҡ, биләгән вазифаларығыҙ буйынса ниәтләгән ниндәй эштәрегеҙҙе атҡарыу ауыр булды йәки килеп сыҡманы?**

- Телебеҙгә дәүләт теле статусы биреү бик ауыр булды, уның өсөн туғыҙ йыл буйына көрәштек. Әммә ҡаршылыҡтарҙы йырып сыҡтыҡ. Тел буйынса займдың немецтарға хас теүәллегенә бәйле бик ҡыҙыҡлы тарихтары, халыҡ теленә күскән лаҡаптары бар. Шуларҙың береһе ҡунаҡ саҡырыуға бәйле. Беҙҙә бит инде ҡунаҡҡа саҡырыу һәм ҡунаҡҡа килеү ваҡыты сама менән әйтелә, әйтәйек, киске 7-гә саҡырһаң, 9-ға килергә лә мөмкиндәр. Ҡыҫҡаһы, ҡартатайым ауыл халҡын ҡунаҡҡа саҡырған ваҡытта теүәл йөрөргә өйрәткән. Үкенес, ҡартатайым иҫән саҡта күп нәмәне һорашып яҙып алмағанмын.

Атайымдың атаһы Сафый ҡартатайым революцияның һуң ҡаҙаҡтар яғына барып, унда ике йыл эшләп, ике ат, ике һыйыр алып ҡайта, ҡарағастан йорт һала. Ҡартатайым сирләп үлеп китә, атайым алты йәштән етем үҫә. Өләсәйем мәрхүмә Таһира ҡарсыҡ күмәк бала менән тороп ҡала, улар астан үлмәһен өсөн ҡарағас йорттарын һатып, землянкала йәшәргә мәжбүр була. 1954 йылдан һуң ғына, миңә өс йәш тулғанда, атайым яңы йорт һалып сыға. Атайым Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, өс тапҡыр яраланыу сәбәпле, 2-се төркөм инвалиды ине. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, ауылдаштары араһында абруйы ҙур булды. Уны һәр ваҡыт иптәштәр суды рәйесе итеп һайланылар.

Тыуған ауылым Моҡастан ун саҡрымдағы Әхмәр ауылы мәктәбенә бишенсе класҡа йөрөп уҡыған саҡтарым иҫтә. Ул саҡта транспорт юҡ, яҙлы-көҙлө тракторҙың асыҡ арбаһында өшөптуңып йөрөйбеҙ. Ул заманда хәҙерге һымаҡ ашхана ла булмай торғайны. Бишенсене тамамлағас, Темәс интернатына уҡырға барҙым. Мин ул саҡта үҙемде Гарвард университетына ингәндәй хис иттем. Бәхетле инем. Ярты сирек уҡығас, Темәс интерна-

- Юҡ. Һуңынан, аспирантурала уҡығанда, йога менән шөғөлләндем. Уҡырға ингәнсе ауылда көтөүсе булып эшләргә тура килгәйне бит. Үҙемде хәҙер студенттарҙа "ковбой" булып эшләнем тип һөйләйем. Ауылда фермала эшләгәндә Баймаҡ китапханаһына барып, 12 том китап алдым. Мәскәү дәүләт университеты студенттары өсөн "СССР тарихы", "Рәсәй тарихы" китаптары ине улар. Шул китаптарҙы уҡығанда, әлбиттә, урыҫ телемде лә шымарттым.

**▸ Интернатташығыҙ, класташығыҙ, һуңынан билдәле шағир булып киткән Буранбай Искужиндың да һеҙҙең менән Свердловскиға юридик институтҡа уҡырға барғанлығы хаҡында ишеткәнбеҙ бар. Шағир биографияһының был осоро уҡыусыға мәғлүм түгел. Буранбай үҙе лә һөйләгәне булманы. Шул хаҡта ла һөйләп үтһәгеҙ ине?**

- Эйе, интернатта уҡығанда ҡарауаттарыбыҙ йәнәш торҙо. Беҙ төндәр буйына серләшә инек. Киләсәккә пландар ҡорҙоҡ. Урта мәктәпте тамамлағас, ул Свердловск геология институтына һынау тотоп инә алмағайны, Баймаҡта машиналар төҙәү заводында эшләп йөрөй ине. Мин уны үҙем менән Свердловскиға юрисlыҡҡа уҡырға барырға күндерә алдым. Унда барғас, беҙҙе ятаҡҡа урынлаштырҙылар. 17 кеше бер бүлмәлә яттыҡ. Милли мәктәпте тамамлағандарҙы (ҡаҙаҡ, сыуаш, татар, бүрәт, яҡут һ.б.) бер төркөмгә туплап, рус теленән диктант яҙҙырҙылар. Буранбай ҙа, мин дә диктантты "дүртле"гә яҙҙыҡ. Рус теленән телдән имтиханды "дүртле"гә, ә тарихты "бишле"гә тапшырҙым. Буранбай дуҫыма көндөҙгө факилә", - тине һәм мин уның килеһе йыл Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инергә тигән ниәтен хупланым. Ысынлап та, ул киләһе йылына уҡыуын БДУ-ла дауам итте. Уҡыуҙы тамамлағас, билдәле шағир, прозаик һәм драматург, Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ағзаһы булараҡ танылыуы ауланы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик иртә мәрхүм булып ҡалды. Иң яҡын баласаҡ дуҫтарымдың береһе ине ул Буранбай Искужин.

**▸ Һеҙ институттан һуң республикабыҙҙың төрлө районларында төрлө урындарҙа тәфтишсе булып эшләгәнһегеҙ, әрме сафында хеҙмәт иткәнһегеҙ, артабан аспирантурала уҡығанһығыҙ, шунан һуң инде донъяла ҙурҡа үҙгәрештәр башланып китеүе сәбәпле дәүләт хеҙмәтенә килгәнһегеҙ. Биографияғыҙҙы яҙмалар буйынса өйрәнгән кеше тормош юлығыҙҙың бындай бороloштарын осраҡлылыҡ тип билдәләр ине. Әйтәйек, кемдер берәү: "Әгәр ҙә Зөфәр Ирғәле улы юриспруденция буйынса киткән булһа - кәмендә республика прокуроры, фән буйынса киткән булһа - институт, университет ректоры булыр ине", - тип әйтер һымаҡ. Был хәлде үҙегеҙ нисек аңлатаһығыҙ?**

- 1973 йылда Свердловск юридик институтын тамамланым. Дыуан районында, Салауат ҡалаһында, Баймаҡ ҡалаһында прокуратура тәфтишсеһе булып эшләнем. Әрме хеҙмәтенән һуң Сибай ит комбинатында юрисконсульт, торлаҡ-хужалыҡ коммуналь хужалыҡ участкаһы начальнигы урынбаҫары, граждандар оборонаһы штабы начальнигы ярҙамсыһы булып хеҙмәт иттем.

**Башҡортостан**

**ҡаршылыҡ, ауырлыҡ булмаһын, һәр ваҡыт оптимисһығыҙ. Оптимизмығыҙ нимәгә нигеҙләнә: тәжрибәгеҙгәме, туплаған белемегеҙгәме, атай-олатайҙарығыҙ рухынамы?**

- Барыһыналыр. Рәсәйҙең тарихы бик үҙенсәлекле, әгәр ҙә уны маятник тирбәлеше менән һынландырһаң, урталығы юҡ: йә унға, йә һулға. Ниндәй генә ауырлыҡ булмаһын, беҙгә уны ирҙәрсә күтәреп, хәлдән килгәнсе республикабыҙ мәнфәғәтенә эшләп ҡалырға тырыштыҡ. Илдәр, дәүләттәр, милләттәр тарихын, уларҙың үҫеш законларын, диалектиканы өйрәнеүем дә минә киләсәгебеҙгә өмөт менән ҡарарға ярҙам итә. Философияның өс законларының береһе инҡар итеүҙе инҡарлау (отрицание отрицания), шуның буйынса бөгөн йәшәүселәрҙең үткәнде инҡар итеүе иртәгәһе көнгә, киләсәккә нигеҙ булып тора. Был үҫештең спираль формаһы. Ҡыҫҡаһы, тормошта бер нәмә лә, бер тарихи ваҡиға ла юҡҡа ғына булмай. Халҡыбыҙ был саҡта "Юҡтан бар булмай" ти. Инҡар итеүҙе инҡарлау ҡануны һәр ваҡыт эшләй.

Йәштәр менән осрашҡанда уларға шулай тием: "Һеҙгә уҡырға, белем тупларға, өйләнергә, күберәк балалар табырға кәрәк. Ихтилалдарға лимитыбыҙ бөткән. Беҙгә яңы быуын башҡорттарын тәрбиәләргә кәрәк. Бер ниндәй ҙә провокацияларға бирелмәйенсә, халҡыбыҙҙы һаҡларға бурыслыбыҙ..."

**▸ Бер тапшырыуҙа: "Мин ҡурайсылар алдында ҡурай уйнамайым, тик үҙем өсөн генә уйнакондың ҡабул ителеүенә ҡарап ҡына үҙемде бушҡа йәшәмәнем, тип әйтә алам. Сит ил ғалимдары, мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһы Конституцияһын иң яҡшы конституция тип тапты. Беҙ әҙерләгән тарихи-ғилми (хоҡуҡи) комментарий Рәсәй Федерацияһы ғалим-юристары тарафынан юғары баһалана. Хәҙер ул, әлбиттә, ҙур үҙгәрештәр кисерҙе, күп йәһәттән Үҙәктекенә яраҡлаштырылды.

**▸ Халыҡтың тиҙ арала ғәскәр төҙөй алыуы тик дәүләтселек тәжрибәһенән генә килә. Мәҫәлән, Бөйөк Ватан һуғышында кавалерия дивизияһы төҙөй алыуыбыҙ ҙа шул уҡ дәүләтселек тәжрибәһенән килә, һ.б. Ошоларҙан сығып, шундай һорау: һеҙ 90-сы йылдарҙа республикабыҙ дәүләтселегенең яңы формаһына нигеҙ һалғанда халҡыбыҙҙың боронғо тәжрибәһенә мөрәжәғәт иттегеҙме һәм ул ниндәй формала сағылыш тапты?**

- 1917 йылда милләтебеҙ юлбашсылары Рәсәй Федерализмының нигеҙ таштарын һалғанда ла боронғо дәүләтселек тәжрибәбеҙгә таянып эш иткән. 90-сы йылдарҙа инде беҙ шул эстафетаны дауам иттек. Иң күҙгә күренеп торғаны: республикабыҙҙың закондар сығарыу органы Дәүләт Йыйылышының Ҡоролтай тип аталыуы ине. Элек-электән халҡыбыҙ барлыҡ мәсьәләләрен йыйындарҙа, ҡоролтайҙарҙа хәл иткән бит. Минең докторлыҡ диссертациямдың исеме лә "Башҡортостандың дәүләт һәм хоҡуҡ тарихы" тип аталды. Совет осоро идеологтары: "Һеҙ бер кем

# ГАРАНТЫ -

## Республикаһы



дә түгел инегеҙ, республика төҙөп бирҙек, беҙгә рәхмәт әйтегеҙ", - тип барлыҡ халыҡтарға ҡарата кәмһетеү сәйәсәтен алға һөрҙө. Ә беҙ тарихтан шуны ла беләбеҙ: руна, орхон-йәнәсәй яҙмалары боронғо төрки яҙмалар булған. Шул дәүерҙәрҙә Дәште (Тышҡы) Ҡыпсаҡ, Хазар, Барын-Табын ҡағанаттары, Һундар дәүләттәре булған. Улар атамаһында "башҡорт" һүҙе булмаһа ла, асылда, улар төрки халыҡтарының уртаҡ дәүләте. Беҙҙең эраға тиклем үк йәшәгән саҡ-массагеттәр ҙә беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ. Аҫаба башҡорт үҙенең шәжәрәһен, ете быуынын белергә тейеш. Ошо факт ҡына ла дәүләтселек күренеше хаҡында һөйләй. Был йола һәм ғөрөф-ғәҙәт хоҡуғы. Был турала беҙ белергә, белергә генә түгел, шәжәрәне белеүҙе дәүләтселектең төп шарты тип баһаларға тейешбеҙ.

**Мине төрөкмән ырыуҙарының Византия империяһы ерҙәрен баҫып алып, Ғосман империяһын төҙөүе һоҡландыра. 1700 йыл буйы 23 армия ала алмаған Константинополь ҡалаһын 21 йәшлек Мәхмүт Икенсе яулап алып, хәҙерге Истанбул ҡалаһына әйләндерә. Ике мең йылдан ашыу донъя буйлап һибелеп йөрөгән йәһүдтәр ҙә үҙ дәүләтен - Израилде төҙөй. Ғөмүмән, һәр бер халыҡтың үҙ дәүләтен төҙөүе милләт булараҡ үҙҙәрен һаҡлап ҡалыуға йүнәлдерелгән. Шулай бит?**

- Тап шулай. СССР тарҡалғас, 15 союздаш республика кимәлендә йәшәгән ҡаҙаҡ, үзбәк, төркмән һ.б. халыҡтар үҙ мөстәҡил дәүләттәрен төҙөүгә өлгәште. Әгәр ҙә ГКЧП булмаһа, беҙ реаль федералистик дәүләттә йәшәр инек. Ул сағында республикабыҙ һәм элекке Советтар Союзы ҡеүәтле үсеш юлынан киткән булыр ине. Горбачевтың юлы бик дөрөҫ ине. Йәһүдтәргә килгәндә, улар бер генә кеше һөйләшкән телдәрен дәүләт кимәленә күтәрә алды. Уларға үҙ дәүләтселеген төҙөүҙә үҙҙәренең меңәр йыллыҡ тарихын яҡшы белеүе, диндәре ярҙам итте. Ысынлап та, тарихһыҙ рух булмаған кеүек, рухһыҙ ҙа тарих юҡ. Совет осоронда аҙ һанлы халыҡтарҙың тарихын юҡ итергә тырышыу ҙа рухыбыҙға һөжүм булды.

**Философияға бәйле бик ҡыҙыҡлы, юморға ҡоролған әйтемдәр бар: "Яҡшы ҡатын эләкһә, бәхетле булырһың, насары эләкһә, философ булырһың". Һеҙҙең был фәнгә мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

- Мин һәр ваҡыт: "Юриспруденция - законлы ҡатыным, философия- һөйәркәм", тип шаяртам. Свердловскиҙа уҡығанда беҙ боронғо Рим, Византия тарихын өйрәндек. Дәүләттең үсеш тарихы мәсьәләләре лә беҙҙең игтибарҙан ситтә булманы. Ә ҡайҙа дәүләт, ҡайҙа тарих бар, ул философиянан, йәмғиәт үсеше ҡанундарынан азат була алмай. Гегелдең һәм башҡа философ ғалимдарҙың барлыҡ хеҙмәттәре менән өй китапханаһында тора, уларға мөрәжәғәт итәм, фекерҙәремде нығытам.

**Һеҙ бер тапшырыуҙа халҡыбыҙҙың бер әйтемен килтергәйнегеҙ: үҙеңдән башҡаны фәрештә тип бел. Быны нисек аңлайһығыҙ?**

- Бында бик тәрән философик һәм юридик мәғәнә ята. Юриспруденцияла ул гәйепһеҙлек презумпцияһы (презумпция невиновности) тип атала. Ҡартатайым, атайым, әсәйем миңә бала саҡтан: "Кеше һинең менән нисек кенә шаярып һөйләшһә лә, һәр ваҡыт етди яуап бир, бер ваҡытта ла кешене мыҫҡыл итмә, һәр кешене фәрештә тип ҡабул ит", - тип әйтә торғайнылар. Гәйепһеҙлек презумпцияһы ла шулай уҡ: кешенең гәйебе суд тарафынан раҫланмайынса, ул гәйепле түгел. Боронғо халыҡтарҙың, дәүләттәрҙең был ҡануны башҡорттоң ҡанында һаҡлана. Ошо әйтем генә лә халҡыбыҙҙың боронғологон күрһәтеүсе дәлил. Халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллығы ла ошо принципҡа нигеҙләнә. Йәғни "Ҡунаҡ Хоҙайҙың илсеһе".

**Ауылығыҙҙа тарихты белгән ҡарттар, олатайҙар бар инеме?**

- Был йәһәттән мин өс быуат араһында үҫтем, тип әйтә алам. Илленсе йылдарҙа әле ун туғыҙынсы быуат кешеләре бар ине. Егерменсе быуат кешеләре менән бергә йәшәйем, әле быны егерме беренсе быуаттамын. Был иҫ китмәле байлыҡ, аңлай һәм һанлай белһәң, әлбиттә. Ауылым ҡарттарының донъяға ҡарашы, фәлсәфәһе боронғоса ине. Бер үк ваҡытта беҙҙең ауылда олатайҙар шул тиклем мәрәкәсел булды. Бер-береһенә үпкәләмәнеләр, һүҙ күтәрә, төрттөрөп әйткәнде үткәреп ебәрә белделәр.

Батша дәүерендә тыуып үҫкән кешеләр һөйләгән фәһемле, әһәмиәтле һәм ҡыҙыҡ ваҡиғаларҙы тыңлап үҫеү бәхете тейҙе. Мәҫәлән, Мәсәғүт тигән бабай Беренсе донъя һуғышында ҡатнашҡанын һәм бер иптәш егетенең һәр ваҡыт: "Һуғыштан имен-аман тыуған яғыма ҡайтып, бер генә көн йәшәп үлһәм дә, үкенмәҫ инем," - тигәнен һөйләр ине. Ысынлап та, был егет ауылына ҡайтып, бер көн йәшәгәс, ниндәйҙер сәбәп менән яҡты донъянан китеп барған. Был хәл минең өсөн һәр саҡ фәһем булып торҙо. 90-сы йылдарҙа мөстәҡиллек - суверенитет өсөн ҡаты көрәш барған бер көндө башыма: "Ошо ваҡиғаларҙа һүҙебеҙ өҫкә сығып, маҡсатыбыҙға ирешһәк, үлһәм дә үкенмәҫ инем", - тигән фекер килде. Мәсәғүт бабайҙың әйткән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп, шунда уҡ ул уйҙы баштан юйҙым. Шунан инде суверенитетты ғәмәлгә ашырып, халыҡтың мәҙәниәтен, телен хоҡуҡи яҡтан ҡурсалап, үҙемдең илемдә йәшәргә Аллаһы Тәғәләнән оҙон ғүмер һораным...

**Ваҡытында совет осоро мәғариф системаһы иң алдынғыһы һаналды. Хәҙер мәктәптәргә Берҙәм дәүләт имтиханын индерҙеләр. Был форманың ыңғай һәм кире яҡтарын нимәлә күрәһегеҙ?**

- Берҙәм дәүләт имтиханының яҡшы уҡыған кешегә бер ниндәй ҙә зыяны юҡтыр. Хәҙер барыһы ла юғары белем алырға тырыша, күптәр аҡсаға диплом һатып ала. Юғары белем алыусы 30 кешенең 5-6-һы ғына ысын мәғәнәһендә юғары белем алыусылар, ҡалғандары белемгә түгел, дипломға ғына эйә булыусылар.

**Нисек уйлайһығыҙ, илебеҙҙәге иктисади көрсөк, сәнәғәттең, ауыл хужалығының үҫешмәүе, тәбиғи байлыҡтар иҫәбенә генә йәшәү иктисадтың фәндән айырылыуына бәйлеме? Әллә был сәйәси мәсьәләме?**

- Бында сәйәси мәсьәлә өҫтөнлөк итә, әлбиттә. Әммә иктисадыбыҙ улай уҡ артта ҡалған тип әйтмәҫ инем. Мәҫәлән, ауыл хужалығын ғына алайыҡ. Беҙ 90-сы йылдарҙа Ҡаҙағстандан иген һорай инек, хәҙер үҙебеҙ сит илдәргә иген һатабыҙ. Ауыл хужалығы продукцияһын етештереү буйынса Рәсәй хәҙер юғары кимәлдә бара. Үҙебеҙҙең ауылдарҙы ғына алып ҡарайыҡ. Элек колхоздарҙа күпме трактор булған да, хәҙер күпме? Ялҡауы килмәгән кеше ауылда йәшәй ала хәҙер. Әлбиттә, ауылдарҙа йәшәүселәрҙең барыһы ла үҙ эшен аса алмай. Шул уҡ ваҡытта совет власының ауыл халҡын бөлгөнлөккә төшөрөүен дә онотмайыҡ.

Ә сәнәғәткә, тәбиғәт байлыҡтарын эшкәртеүгә килгәндә, улар барыһы ла олигархтар ҡулына күсте. Рәсәйҙә йөҙҙән ашыу миллиардер бар. Улар барлыҡ ил халҡы етештергән байлыҡты бүлешеп алды. Бында инде сәйәсәт башлана.

**XX быуат башҡорто менән XXI быуат башҡорто ни яғы менән айырыла?**

- Был айырылғанлыҡ иң тәүҙә йәштәрҙә күренә. Уларҙың донъяға ҡарашы беҙҙекенән икенсе. Беҙ күбергәнен дәүләткә һалынһаҡ, улар барыһын да үҙ көсө, үҙ ҡулы менән башҡара. Миндә ике егет водитель булып эшләне. Икеһе лә ауылдан килеп, Өфө янында өй һалды, икеһе лә институтта ситтән тороп уҡый, өйләнгәндәр, балалар үҫтерәләр. Ҡасан Хөкүмәт аҡса, фатир бирә, тип көтөп ултырмайҙар. Балаларын башҡорт мәктәбендә уҡыталар, айыҡ тормош алып баралар. Һуңғы йылдарҙа Өфөлә башҡорттарҙың артыуын күреп ҡыуанам. Магазинға инеп, "Һеңлекәш!" тип өндәшеүең була, шундуҡ туған телебеҙҙә яуап биреп, һораған тауарҙы килтереп тә еткерәләр. Телебеҙгә дәүләт теле статусы яулауҙа туранан-тура ҡатнашҡан кеше булараҡ, бында минең дә өлөшөм бар, тип ҡыуанып йөрөйөм. Йәштәргә ҡарап, киләсәккә оптимистик ҡараш тыуа.

**Нурсолтан Назарбаев Ҡаҙағстанды нисек күтәрә алды тип иҫәпләйһегеҙ?**

- Беренсенән, уларҙың тәбиғи байлығы күп, икенсенән, Европаның ниндәй генә иленә барһаң да, ундағы вуздарҙа белем алыусы меңәрләп ҡаҙаҡ егеттәрен осрата торғайным. Бөгөн ҡаҙаҡ егеттәре туған телендә, урыҫ һәм инглиз телендә иркен аралаша. Тағы ла Назарбаев хужалыҡ бәхәстәренә бәйле суд эштәрен Англиянан судьялар саҡыртып үткәрә башланы. Был Ҡаҙағстанға инвестициялар йәлеп итеү мөмкинлеге бирҙе, нимә генә тимә, инвесторҙар тоторокло климатлы илгә ынтыла.

**Европала, Американа йөрөгәндә уларҙың тормошондағы ниндәй күренештәргә ҡарап һоҡланғанығыҙ булды? Мәҫәлән, Америкала булыусылар уларҙың закон ҡоло булыуы хаҡында һөйләй. Был дөрөҫмө?**

- Сөнки закон уларға лайыҡлы тормош өсөн гарантия булып тора. Беҙҙә иһә, законды төрлө яҡҡа борорға, кемдеңдер файҙаһына йүнәлтергә була. Америка конституцияһы 300 йыл буйына үҙгәрешһеҙ һаҡлана. Беҙҙә иһә уны һәр ил башлығы үҙенә ҡулайлаштыра. Был хәл ил үсешен тотҡарлай, граждандарҙа Төп законға ҡарата ышанысты кәметә. Америка штаттарҙан тора, штат һүҙе (state) инглиз теленән дәүләт тигәнде аңлата. Ғөмүмән, АҠШты инглиз теленән Америка Ҡушма Дәүләттәре тип тәржемәләү дөрөҫ һәм ул уның юридик йөкмәткеһенә тура килә. Һәр бер штат айырым дәүләтте тәшкил итә. Уларҙа губернатор, вице-губернатор, дәүләт секретары, баш казначей, прокурор, аудитор - барыһы ла халыҡ тарафынан һайланып ҡуйыла. Шул принципта төҙөлгән дәүләттә урлашыу, халыҡ милкен үҙләштереү мөмкин түгел. Шуға күрә лә АҠШ-тың 300 йыллыҡ тарихында штат етәксеһе - губернаторҙарҙың берәүһе лә яуапҡа тарттырылғаны юҡ. Беҙҙең илдә иһә, 20 йыл эсендә йылына берәр губернатор, йәғни республика башлығы урлашып, төрмәгә эләгә... Был бик хәүефле күренеш!

Ваҡытында Башҡортостан менән Татарстан суверенитет яулағас, йәнәһе, Рәсәй составынан сығырға йыйыналар, тип лаф орҙолар. Шул саҡта мин Башҡорт хөкүмәтенең 1917 йылда ҡабул иткән документтарын өйрәндем. Был документтарҙа тәҡдим ителгән Рәсәй Федерацияһының ҡоролош концепцияһы ысын мәғәнәһендә федерализм принциптарына тура килә ине. Докторлыҡ диссертацияһы яҡлағанда Мәскәү һәм Санкт-Петербург университеттарында эшләүсе Рәсәйҙең билдәле ғалим-юристары "Башҡорттар - Рәсәй Федерацияһына нигеҙ һалыусылар", тигән фекерем менән тулыһынса килеште...

**Етмеш йәшкә еткән кеше үҙ алдына ниндәйҙер ҙур пландар, башланмаған эштәр ҡуя аламы икән? Әле ниндәй гәмдәр менән йәшәйһегеҙ?**

- Алдағы йылдарымда ғилем өлкәһендә эшләрмен, хеҙмәттәр яҙырмын тием. "Быуаттарҙан - быуаттарға" тигән китабымды башҡорт телендә яҙҙым. Әле уны сығараһы бар. Унда документтар урыҫ телендә килтерелә.

Хоҙайға шөкөр, улым менән ҡыҙым үҙаллы донъя көтәләр. Улым ейән, ҡыҙым ейәнсәр бүләк итте. Ҡыҙым төп эшенән башҡа сабыйҙарҙы башҡорт теленә өйрәткән "Тел аҫҡысы" тигән йәкшәмбе түңәрәге алып бара. Ҡыҫҡаһы, башлаған эштәремде балаларым дауам итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡорт халҡының михнәттәр сигеп, инҡилаптарҙа көрәшеп яулаған дәүләте - Башҡортостан Республикаһы - уның именлегенең гаранты булып тора" - был һүҙҙәр Зөфәр Ирғәле улы яҙған ғилми хеҙмәттәрҙең төп тезисы булып тора. Уның 70 йыллыҡ ғүмере лә ошо инаныуҙа үткән. Юбилейығыҙ менән, Зөфәр Ирғәле улы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
әңгәмә ҡорҙо.

✓ **"Мин бәхетле, миңә рәхәт. Мин артист түгел, сөнки мин - ер аҫтында. Теләһәм, Анфиса менән булам, теләһәм, директорыбыҙҙың битенә төкөрәм, президентты һүгәм. Бына ҡайҙа ул ирек! Ер аҫтында!"**



### Икенсе төн

Ир ойоп та киткеләнә. Күпме ваҡыт йоҡлағанын да белмәне. Нисектер, йоҡоһо һаҡ булһа ла, татлы ла ине. Донъяһын онотоп китеп ойоно. Быға тынлыҡ менән саф һауа булышлыҡ иттеме, әллә ҡотолғоһоҙ хәлгә яйлап ҡына ышана барыуы сәбәпсе инеме - ойоно, тәне ял итте. Әбейҙәр сыуағына тура килеүе - уның бәхете, көндәр - ҡояшлы, ә төндәрен көн йылыһы, ҡышын яғылған мейес кеүек, ҡапыл юғалманы, яйлап ҡына һүрелә ине, шуға улай һыуыҡ үҙәккә үтерлек итеп өшөтмәй ҙә. Таңға табан ғына өшәнеп уянды ул. Ҡараңғы ине. Күҙен асыр-асмаҫ ҡына күккә ҡарап ятты. Бер йондоҙ күренә, артынан икенсеһе килеп сыға.

- Йондоҙҙар уйнаша. Тимәк, ер шары әйләнеүенән туҡтамаған, - тип һөйләнгән булды. Һөйләнәме, уйланамы, әллә уйҙары менән шулай әңгәмә ҡорамы ул - бик аңламай ҙа ине шикелле. - Ваҡыт та "тыыр" тимәй, бара, уҙа, китә. Мин генә туҡтағанмын. Әллә ер менән бергә әйләнгәс, мин дә хәрәкәттәме?!

Эһе-һей, ер өҫтөндә ниҙәр ба-ар? Елдәр иҫәме унда, ағастар япраҡ ҡоямы? Бында, ер аҫтында, тып-тыныс. Тауыштың юҡ. Ысынлап та, донъяла мин япа-яңғыҙмы ул әллә?

Яңғыҙ, тигәс, иҫенә йәш саҡтағы мәғәнәһеҙ генә бер көләмәс иҫкә төштө.

Бер грузиндың бисәһе үлгән. Мәйетте ҡәбергә тапшыралар. Туғандары, яҡындары янында ир ҡайғынан түгелеп илай икән:

- Один, совсем один. Один, совсем один, - тип һөйләнеп күҙ йәше түгә.

Бисәһенең ҡәбере янында яңғыҙы ултырһын, һағышын таратһын тип, яҡындары яйлап таралып бөтә. Грузин яйлап ҡына тора ла тирә-яғына ҡаранып ала һәм, бер үҙе генә икәнен белгәс:

- Один, совсем один! Один, совсем один! Один, совсем один! - тип ҡыуана, бейергә, йырларға тотона. Шул.

Зөбәйерҙең бер дуҫы грузин акценты менән эй килештереп һөйләй торғайны шуны. "Совсым одын" тип бейеп тә ала ине. Көләшәләр. Зөбәйер генә, һуң яңғыҙ ҡалыуҙың ни ҡыҙығы бар инде, тип тыныс ҡала ине. Хәҙер бына аңлаған кеүек.

Ул дөм-ҡараңғы соҡорҙо уратып, стеналарҙы тотҡолап сыҡты.

- Мин дә савсем одын, савсем одын. Мин яңғыҙ, был ер шарында мин яңғыҙ, ур-ра, ур-ра! Уйлаһаң, бәхет бит ул япа-яңғыҙ ҡалыу, - шатланған булып ул үҙен-үҙе ҡосаҡлап алған булды. - Оло ер шарында мин - Робинзон Крузо! Мин - Робинзон Крузо! - тип бышылданы ла тирә-яғына ҡаранып алды. Ысынлап та мин яңғыҙмы ул, тип шикләндеме?

"Яңғыҙ саҡта мин үҙ серемдә үҙемә сисә алам, бар донъя мәшәҡәтенән арынып, тирә-йүндәге кешеләр ҡарашынан, миңә булған мөнәсәбәттәренән азат булып... Ура! Хәҙер мин сер сисәм. Үҙемә. Мин Әминәне яратмайым. Бисәмде. Элек яраттым. Хәҙер - юҡ. Мин күршенең ҡатынын теләйем. Анфисаны. Уның һары сәстәрен еҫкәп, ҙур түштәренә башты һалып ятҡы килә. Килә! - ипләп тағы ла тирә-яғына ҡаранып алды. - Ысынлап та бер кем дә юҡмы бында?"

Бышылдап ҡына:

- Анфиса, я тебя хочу! Теләйем, - ул ипләп кенә салбар шәлтәүҙәрен ысҡындырҙы ла... блондинка күршеһен күҙ алдына баҫтырҙы. - Ҡабаланма, Анфиса. Ҡурҡма ла, бер кем дә юҡ, беҙ икебеҙ генә...

Күрше тигәндән, ике ай элек уларҙың, эйе, Анфисаларҙың, фатирына бурҙар төштө. Стена аша Зөбәйер ҙә, ҡатыны Әминә лә бөтәһен дә белеп, ишетеп ятты. Күршеләрҙең Ҡырымға ял итергә киткәнен дә белә ине улар. Полицияға шылтыратам, тип ир бер нисә тапҡыр ынтылды. Ә Әминәһе, бәләһенән баш-аяҡ, кәрәкмәй, байҙар унан ғына ярлыланып китәме, тип күндерҙе, дөрөҫөрәге, дүндерҙе. Ә улар, күршеләр, ялдан ҡайтҡас, быларҙың нисек артисланғанын күрһәгеҙ. Әминә иң шәп актрисалар кеүек ни генә ҡыланманы ла ни генә һөйләмәне:

- Ишетмәнек, белмәнек бит, асҡысығыҙҙы ҡалдырып ҡына китмәгәнһегеҙ ҙә, гөлдәрегеҙгә һыу һибеп, үҙебеҙҙекеләй күреп ҡарап ҡына торор инек.

"Анфиса, Анфиса!" - тип наҙлы ғына өндәшеп, ләззәт алғас, ир ошо хәлдә иҫкә төшерҙе. Тапҡан төн уртаһында юҡбар хәлдә хәтеренән соҡоп ултырырға.

- Шулай ҙа динһеҙ, аллаһыҙ бер әҙәм һин, Әминә. Мин дә шундай! Сволочь, йүнһеҙ бер! Мин һиңә хыянат иттем. Анфиса менән, уйҙа булһа ла, - тип ҡуйҙы үҙе.

"Был сер түгел, был беҙҙең көҙимге тормош. Битлек кейеп артист булып йәшәйбеҙ. Ысын йөҙөбөҙ ер аҫтына төшкәс кенә беленә икән. Табутҡа ятҡас. - Майлы ҡулын биштәренә һөрткөләп алды. - Мин яңғыҙ бөгөн. Мин бәхетле, миңә рәхәт. Мин артист түгел, сөнки мин - ер аҫтында. Теләһәм, Анфиса менән булам, теләһәм... - ни әйтергә белмәне лә. - Ну, теләһәм, директорыбыҙҙың битенә төкөрәм, президентты һүгәм. Бына ҡайҙа ул ирек? Ер аҫтында!"

Башын тотоп ултырҙы ла ҡапыл йөҙрөгө менән ҡаҡ ергә килтереп тондорҙо. Соҡор эсе генә түгел, күк һелкенеп киткәндәй булды.

- Юҡ! Һис тә рәхәт түгел! Яңғыҙлыҡ - иң ҡыйыны, - йәмһеҙ итеп көлөргә тотондо. - Ха-ха, Анфиса, президент, имеш... Миңә әсәй кәрәк, ҡыҙым кәрәк. Һеҙ ҡайҙа? - Көлдә-көлдә лә ир, яйлап ҡына үкереп иларға тотондо. - Әсәй, әсәкәйем, мин асыҡтым, миңә һыу биргеҙ. Миңә юрған ябығыҙ әле, өшөйөм. Ҡыҙым, тим...

Йомарланып ятты. Оҙаҡ ятты. Йоҡлап киттеме, әллә тынысланыуы шулай булдымы - ҡымшанманы ла.

Таңға табан күк йөҙөн болоттар ҡаплай башланы. Ел иҫте. Ҡай саҡ киҫкен генә "байрағын болғаны". Төн яҡтыра төштө. Ир үләндәр, япраҡтар ҡыштырлаған тауышҡа штормовка эсенән ҡапланған башын сығарып өҫкә ҡарап алды. Һыуытмаһа ғына ярар ине. Ә шулай ҙа, ямғыр яуһа, ҡалай шәп булыр ине, һыуһатты.

- Яу-яу, ямғырым, бот күтәреп ятырым,- тип һамаҡлап, янынан ойоп китте.

Төшөндәме, өнөндәме эт өргән тауыш та ишеткәндәй булды Ир. Тик ҡалҡынманы, йыбанды, унан бигерәк, ҡолағына ишетеләләр, тип уйланы. Берсә соҡорҙа ятҡанын онотто, өйөндә тип хис итте. Төшөндә күп бығаулы кешеләр-тотҡондар күрҙе. Уның янынан бығауҙарын, сынйырҙарын шаулатып үтәләр. Үҙҙәре бер ни өндәшмәйҙәр. Берәүһе туҡтап, тубыҡланып ултырҙы ла бығауҙы тартып өҙөргә маташты. Тағы йөрөп килә лә, тағы өҙөп маташа, башҡа тотҡондар ҙа тартып ҡарай, тик бығау өҙөлмәй. Өҙөлмә-әй...

Ир тирләп уянып китте. Ҡулдарын ҡараны, баяғы тотҡон кеүек тубыҡланып ултырҙы ла "бығауҙарын өҙөп ташланы". Иркен тын алып күккә ҡарап ултырҙы.

- Үҙемде тотҡон тип... Изгегә булһын был төшөм дә. - Ҡулдарына ҡарап алды. Йылмайҙы. - Мин ирекле, ҡулдарым азат.

Ҡалҡынып, ҡулдарын йәйеп "осоп" ҡараны. "Ҡанаттарымды йәйеп осоп сығып китәм хәҙер был соҡорҙан. Хәҙер, хәҙер, - ярһып китеп, "ҡанаттарын" нығыраҡ елпергә тотондо. Эй, елпене, тик осоп ҡына сығып китә алманы. Шунан хәле бөтөп тынысланып, стенаға һөйәлде. - Юҡ, ҡанат булһа ла, мин осмаҫ инем. Мин был тормошта бығаулы. Эйе, осмаҫ инем. Сөнки мин осор өсөн яратылмаған. Мин ерҙә шыуышыр өсөн... Ул ҡанаттарҙы мин бына ошонда ғына йәйер инем дә шунда ятыр инем. Үҙе йомшаҡ, үҙе йылы. Ятыр инем, ятыр инем... - бөгәрләнеп ятты, ҡулдарын башы аҫтына һалды. - Һыуыҡ, нығ һыуыҡ, ҡайҙа минең ябыныр ҡанаттарым, ҡайҙа?"

Башына төрлө уйҙар килде. Кешегә өйрәнгән таяғын ташлап китеүе лә ҡыйын тигәндәй, уға үҙенең ошо соҡоро оҡшағандай ҙа тойола башланы. Бәлки, ул шулай күңелен тынысландырырға тырышалыр.




"Уйлаһаң, соҡор шәп нәмә икән ул. Бында тыныс, ҡурҡыныс түгел, - тигән һығымтаға килде ул. - Ер өҫтөндә йоҡлап ҡара. Өҫтөңә берәй машина килеп менергә мөмкин, йә берәй эт, йә берәй бүре йәнле әҙәм боғаҙыңа йәбешерен көт тә тор. Ә бында тыныс, бер кем һөжүм итә алмай. Хатта айыу ҙа. Акула ла! Ошо инде "самоизоляция", үҙ-үҙеңде ҡурсалау. - Ир ауыҙын асып иңрәп, рәхәтләнеп ойоп бара ине. - Әле килеп берәйһе артыма типһә, һөйөнөр инем дә", - йоҡо аралаш йылмайғандай ҙа булды.

Бер аҙҙан күҙен асып йөҙөнә асыулы төҫ индерҙе:

- Тыныс түгел. Түгел, тим! Мин үҙемә үҙем һөжүм итәм бөгөн. Мин үҙ-үҙемә бүре бөгөн. Акула булам. Йоҡла, йоҡлай алһаң, мужик. Ана бүре булып аслыҡ, акула булып һалҡынлыҡ килә һиңә...

### Өсөнсө көн

Иртәнге болоттар таралып, бар йыһанды ҡояш иркәләй ине. Ир самолет гөүләгән тауышҡа уянып китте. Тәүҙә күктә ярып килгән тауышты иҙрәп кенә тыңлап ятты ул, гөүләү нығыраҡ ишетелә башлағас, ҡапыл һикереп торҙо ла:

- Ай-й, - тип йығылып китте. Гөп шешкән һул аяғын ҡосаҡлап ултырҙы. Кисә шешә башлағанын һиҙгәйне ул, насар уйға бирелмәҫкә тырышты, бәлки, бөтәр, тип өмөтләнде. Уныһы... бөгөн баҫырлыҡ түгел.

Самолет тауышы һүрәнләнә төштө. Хәҙер ҡәҙерле бер нәмәһен юғалтыр төҫлө ир уң аяғына баҫты ла һикерәнләргә тотондо. Сатан һайыҫҡан ише һикерә-һикерә дәртләнеп һамаҡларға тотондо:

- Самолет, самолет, посади меня в полет. Самолет, самолет, посади меня в полет!.. - Самолет тауышы йыраҡлашҡан һайын ирҙең дә дәрте һүнә барҙы. - А в полете пусто, выросла капуста. А в капусте - червячок. Дядя Ваня дурачок. Дядя Ваня түгел, дядя Зөбәйер дурак ул. Ер етмәй берәүгә.

Кеше ауыр хәлгә ҡалһа, балаға әүерелә икән. Шулай сафлана барамы икән аңы, күңеле? Бынау һанашмаҡ, тиҙәйткестәрҙе бер егерме, бәлки утыҙ йылдар иҫенә алғаны ла юҡ бит инде, ә әле килеп... нисек хәтергә төшә тиң? Малай саҡта шулай күктәге самолетты ерҙән ҡыуа төшөп, үсектереп ҡала торғайнылар.

"Ашайым тиһәм - ашым, һөйәм тиһәм - ҡатыным, йәшәйем тиһәм - өйөм, йырлайым тиһәм - көйөм бар, һей, инәңдең йәшел сәйе, нәфсе ҡоторта әҙәмде. Һыуһаттырҙыыйы".

Унда һыу юҡ икәнен белһә лә, биштәрен аҡтарып ҡараны. Баяғы буш шешәне тағы ла түңкәреп иренәнә терәне.

- Мөғжизә юҡ, Ҡыш бабай килмәгән, һыу ҡалдырмаған. Бер тамсы һыу юҡ. Битте, ҡулды йыуырға ла.

Күҙ йәше менән буталған саң уның йөҙөн танымаҫлыҡ хәлгә килтергәнен ул үҙе белмәй ҙә ине. Бысрап, ҡан таптары ҡаплаған ҡулы менән ипләп кенә ҡоҙоҡ стенаһын һыпырғыланы ла битен терәп торҙо. - Ерҙә дым бар кеүек. - Теле менән ерҙе ялап ҡараны. - Фу-у... Ҡара әле, улай уҡ тәмһеҙ ҙә түгел. - Бер нисә тапҡыр яланы. Теленең йөҙө шайыҡланып бысрап китте. - Тыуҙырған да, үҫтергән дә, үҙ ҡуйынына алған да ер инде. Тәмле генә. Башҡа сығып китте. Тыуған ер тупрағы һуты иҫертте тамам.

Нисектер рәхәт булып китте. Әллә бер йыр һуҙып ебәрергәме? Үҙенән-үҙе теленә русса йыр килде.

- Мальчик хочет в Тамбов, ты знаешь чики-чики-чики-чики-та.

Мальчик хочет в Тамбов, ты знаешь чики-чики-чики-чики-та.

Но не летят туда сегодня самолеты и не едут даже поезда.

Но не летят туда сегодня самолеты и не едут даже поезда.

Тәк-тәк, иртәнге аш та, иртәнге концерт та тамам, радио тыңлаусылар. Бөгөн һеҙҙең менән теге өсөүҙең береһе генә булды, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы.

Кеҫәһе төбөнән ҡаҙаҡты эҙләп тапты ла өсөнсө һыҙыҡты һыҙып ҡуйҙы.

- Өсөнсө көн. Кеше нисә көн ашамайынса тора ала икән? Бер ай -илле көн шикелле. Ә һыуһыҙ нисә көн интегергә була? Өс көнмө, бер аҙнамы? Һыу тапмаһам, миңә көйүк.

(Дауамы. Башы 11-се һанда).

✓ *Әминәлә эске ныҡлыҡ, ихтыяр көсө һиҙелә, ул маҡсатына ирешә белгән ҡыҙыҡай. Мин уны әсәй күҙлегенән баһалап, Алла бирһә, ниндәй генә һөнәр эйәһе булып китһә лә, бирешмәҫ, тип уйлайым.*



КЕМ БАЛАҺЫ, ТИЕП...

**4 марттан Мостай Кәрим повесы буйынса төшөрөлгән "Өс таған" ("Отряд таганок") фильмын Башҡортостан кинотеатрҙарында ҡарай башланыҡ. Уның режиссеры Айнур Асҡаров әйтеүенсә, башҡорт киноһында бындай сифатлы тауыш, һүрәт һәм көйҙәрҙең булғаны юҡ ине әле. Уларынан да алда беҙҙе фильмдағы балаларҙың уйнауы, кем булыуы һәм хатта кем балалары булыуы ҡыҙыҡһындыра. Йәш артистарҙан дүрт малай араһындағы берҙән-бер ҡыҙыҡай хаҡында уның әсәһенән мәғлүмәттәр алдыҡ. Бына кем балаһы икән Әминә Яҡупова.**

# "ӨС ТАҒАН"ДЫҢ ГӨЛНУРЫ







**➔ Әминәнең атай-әсәһе, йәғни, һеҙ үҙегеҙ кемдәр, ҡайһы яҡ кешеләре, эш урындарығыҙҙы ла белергә теләйҙер тамашасы?**

- Әминәнең атаһы Вилорий Альберт улы Өфө егете, ул ябай эшселәр ғаиләһендә тәрбиәләнеп үҫкән. Мәскәү дәүләт халыҡ-ара бәйләнештәр институтын, дипломатик академияны тамамлаған, сит илдәрҙә стажировка үткән һәм эшләгән. Бөгөн БР Дәүләт Йыйылышында белгес. Күп телдәрҙе белә, шул иҫәптән туған телен дә бала саҡтан яҡшы үҙләштергән. Мин уны, ҡатыны булараҡ, бик төплө, фекерле, белемле ир кеше тип баһалайым. Шундай атайҙың ҡыҙы ул бәләкәс Әминә.

Ә мин - әсәһе, Гөлназ Мозафар ҡыҙы, сығышым менән Учалы районы Яңы Байрамғол ауылынан. Атайым - уҡытыусы, әсәйем шәфҡәт туташы булды. БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистикаһы факультетын тамамлап, күп йылдар Башҡортостан юлдаш телевидениеһында эшләйем, "Бәхетнамә" проектын етәкләйем.

**➔ Әминә ниндәйерәк бала булып үҫеп килә? Уның ҡыҙыҡһыныуҙары, шөғөлдәре бармы?**

- Шөғөлдәренән күп нәмә юҡ, тиһәк, дөрөҫөрәк булыр: фортепианола уйнай, рәсемгә йөрөй, шашка түңәрәктәрендә шөғөлләнә, бассейнда йөҙә һәм башҡалар. Баланың буш ваҡыты юҡ, барыһына ла өлгөрөргә тырыша. Өйҙә аҙ ғына иркенләһә лә, илһамланып һүрәт төшөрә башлай. Унан ҡалһа, интернеттан төрлө рецептар табып, тәмлекәстәр бешерә, үҙенең генә вафельницаһы бар. Шундай ололарса иғтибарлы, миһырбанлы ғына ҡыҙыҡай ул, хәлгә инеп, аңлап, күреп бара. Хатта өйҙәге "бәләкәй дуҫтар"ға ла айырыуса төбәлгән ваҡыт бүлә белә. Бесәй менән уйнарға ярата. Уны ашатыуға, тәрбиәләүгә бик яуаплы ҡарай.

Дуҫлаша белә. Дуҫтарын, әхирәттәрен яратып, хөрмәт итеп тора. Уға шундай намыҫлы, тоғро дуҫ була белеү үҙенсәлеге һалынған, ололарға был күренеп тора. Йәш аралары ике генә йәш булһа ла апаһы Сәлимәне бәләкәйҙән "апай" тип йөрөтә, шулай өйрәттек. Үҙен һенле итеп тоя, тыңларға, кәрәк саҡта буйһонорға икәнде аңлай, ҡабул итә.

**➔ Һеҙ уға тормоштоң ниндәй асылдарын өйрәтергә тырышаһығыҙ? Талаптар ҡуйыламы?**

- Кинолағы һымаҡ айырым ултырып ниндәйҙер тормош асылдарын өйрәткән юҡ, бала ата-әсәһенә, уларҙың ҡылыҡтарына, йәшәү рәүешенә ҡарап тәрбиә алалыр ул. Һүҙ менән нимә тип кенә әйткәндә лә, ул көнкүрештә күргәндәренә ныҡыраҡ ҡолаҡлаша. Йәғни, ояһында ни - осҡанда ла шул буласаҡ.

Талаптар ҡуйырға өйрәнәбеҙ. Мәҫәлән, өйҙә башҡортса һөйләшергә кәрәк икәнен беләләр. Шулай уҡ уҡыу буйынса ла, тәртип яғынан да, атай-әсәйгә ҡарата мөнәсәбәттә лә айырым талаптар бар. Былар, әлбиттә, тик яҡшылыҡ, хөрмәт кеүек ныҡ нигеҙ төшөнсәләргә ҡоролған.

Ауылға йышыраҡ ҡайтарырға, өләсәй менән, ауыл балалары менән аралаштырырға тырышабыҙ. Ауылда, ғәҙәттә, ғаилә-ара мөнәсәбәттәр, эшкә өйрәнеү, ололарҙы тыңлап өйрәнеү кеүек тәрбиәүи алымдар ғәҙәти, тәбиғи күренеш бит.

**➔ Һеҙҙеңсә, заман ҡыҙыҡайы нисек үҫергә, уның өсөн нимәләр мөһим булырға тейеш? Башҡорт ҡыҙы, мәҫәлән?**

- Беҙҙең ҡыҙҙар ҙа үҙ заманының балалары. Уларҙың формалашыуына Инстаграм, Тик-ток кеүек социаль селтәрҙәр, дуҫтары, социум ныҡ йоғонто яһай. Быларҙың береһен дә тыймайбыҙ, сөнки ҡыҙҙар заман менән бергә атларға тейеш, уларҙы ҡурсаулыҡтағы кеүек итеп үҫтереп булмай. Яҡшыны яманлан айыра белерҙәр тип ышанабыҙ. Беҙҙең маҡсат - уларға дөрөҫ юлды һайлашыу. Уны табыу өсөн тәжрибәләр үткәреп ҡарауға форсат биреү, төрлө миҫалдар аша дөрөҫ юлды күрһәтеү. Мәҫәлән, өлкәненең сәсте һарыға буяйым, маникюр яһатам, тигәненә лә "юҡ" тип әйтмәнек, сөнки үҫмерлек осоронда бындай тәжрибәләр ҙә кәрәк, тип иҫәпләнек.

Башҡортлоҡ төшөнсәһен һәр быуын үҙенсә аңлай. Үҫмерҙәргә, йәштәргә нимәнелер көсләп тағып булмай. Өлкәндәрҙең бурысы - үҙ милләтенә һөйөү тәрбиәләгән тәбиғи мөхит булдырыу. Ни тиклем тәбиғирәк булһа, шул тиклем яҡшыраҡ. Мәҫәлән, өйҙә мин туған телдә ниндәйҙер әйтем, көләмәс, тиҙәйткестәрҙе ҡулланам. Махсус рәүештә түгел, нисектер, үҙенән үҙе килеп сыға, өләсәйҙәрҙән ҡалған ғәҙәт шикелле. Ауылда йәшәгән әсәйем дә мәҡәлдәр ҡушып һөйләшә. Башҡортса радио һәм телетапшырыуҙар, концерт, спектаклдәр ҙә ошо тәбиғи мөхитте киңәйтергә ярҙам итә.

Бөгөнгө башҡорт ҡыҙы бары тик белем алыуға, заман менән бергә атларға ғына ынтылырға түгел, ә үҙенең милләттең киләсәген тәрбиәләр ғүзәл зат булыуын да онотмаҫҡа тейеш. Быны беҙ, ата-әсәләр, һалырға бурыслы уның башына. Мәҫәлән, аш-һыу, өй ҡарау, ир-атҡа дөрөҫ ҡараш, балалар үҫтереү кеүек мәсьәләләр ҙә уның өсөн алғы планда булырға тейеш. Йәғни, ул ниндәй заманда ла үҙенең ҡыҙ бала, киләсәктә буласаҡ ҡатын-ҡыҙ икәнен белһен.

**➔ Әминәне үҫкәс кем итеп күрергә теләйһегеҙ? Үҙе был хаҡта ниндәй пландар ҡора?**

- Беҙҙең Әминә өс йәшенән алып врач булам тине. Әгәр ҙә был ҡарарынан кире ҡайтмаһа, тырышып уҡыһа, барыһы ла килеп сығыр тип уйлайбыҙ. Актерлыҡ һәләте лә бар, әлбиттә, тасуири итеп шиғырҙар һөйләй, роликтарҙа төшә, "Тамыр" студияһының тапшырыуҙарында ҡатнаша. Әле бына фильмда төшөп ҡуйҙы. Былар барыһы ла баланың шәхесен үҫтерә, тип ышанабыҙ.

Әминәлә эске ныҡлыҡ, ихтыяр көсө һиҙелә, ул маҡсатына ирешә белгән ҡыҙыҡай. Мин уны әсәй күҙлегенән баһалап, Алла бирһә, ниндәй генә һөнәр эйәһе булып китһә лә, бирешмәҫ, тип уйлайым.

**➔ Барыһының телендәге киноға төшөү тарихы нисегерәк булды? Әминәгә оҡшанымы актриса роле?**

- Беҙ башҡа балалар үткән кастингта ҡатнашманыҡ. Сөнки мин фильмға һынау тотоу хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡас, аталары: "Беҙҙең ҡыҙҙар ҡала балалары бит, унда ауыл мөхитендә үҫкән балалар талап ителгән", - тип ҡуйҙы һәм беҙ уның менән килешеп, ауылға йәйге ялға киттек.

Уйһыҙ ғына ауылда ята инек, әхирәтем "киноға һаман ҡыҙ таба алмайҙар икән" тип хәбәр итте. Шул саҡ беҙ ҙә тоҡанып киттек һәм ҡыҙыҡ күреп, фото, видеоларҙы режиссерға ебәрҙек. Беҙҙе киләһе турға саҡырҙылар. Икенсе кастинг Өфөлә булды, унда Әминә малайҙар менән танышты, Айнур Юлай улының талаптарын тыңланы, йырлап-бейеп күрһәтте. Шулай итеп, уйламағанда фильмға үтеп киттек.

Баланы бер айға Ғафури районы Толпар ауылына ҡалдырып китергә тура килде. Шулай итеп, яңы урында, яңы кешеләр менән һәм бөтөнләй яңы булған эш менән ҡайнап тороп ҡалды Әминәбеҙ. Рәссам ярҙамсыһы Алһыу, актриса Зиләрә апайҙар әсәй урынына булды, уларға рәхмәт. Гөлнур ролен Йәмлиха апай теккән ҡыҙыл күлдәк бәләкәйерәк булып сыға, әммә ижади төркөм нисек бар, шулай ҡалдырырға хәл итә. Ҡыйыу Ғабдулла Гөлнурҙы үгеҙҙән ҡотҡарған эпизодта Әминә иларға тейеш икән дә, һөйләүҙәренсә, Әминәне илатып булмаған һәм кинола беҙ оҫта гример Ләйсән апай төшөргән күҙ йәштәрен күрәбеҙ. Ҡайһы бер эҙәктәр (эпизодтар) ныҡ һыуыҡта төшөрөлә, тик балалар бында ла һынатмай. Ҡыҙыҡ мәлдәре күп була уларҙың. Ғөмүмән, кинола төшөү, батыр малайҙар тураһындағы матур хикәйәт, Гөлнур роле үҙе үк бала күңелендә онотолмаҫ ваҡиға, күңелле бала саҡ хәтирәһе булып ҡалыр тип уйлайым. Әлегә Әминә уларҙы аңлай һәм баһалай алмаһа ла, был мотлаҡ шулай буласаҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Башҡорт балалары араһында һуңғы йылдарҙа ошондай йондоҙсоҡтар балҡып күренә, сәнғәт күген яулай башланы. Уларҙың барыһы ла артист һәм актрисалар булып бөтмәһә лә, башҡорт кино сәнғәтендә якты эҙ ҡалдырырҙары билдәле. Шуларҙың береһе бәләкәс Әминә Яҡупова. Беҙ уны "Өс таған"дың Гөлнуры тип иҫәп ҡалырбыҙ.**

Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА
һөйләште.

*✓ Аныҡыраҡ әйткәндә, ҡәһүә гепатоцеллюляр карциноманан - бауыр яман шешенең тәүге формаһынан һаҡлай ала. Шуға ла ҡәһүә кеүек кофеинлы эсемлектәрҙе зарарлылар исемлегенә индерергә ашыҡмаҫҡа кәрәктер, моғайын.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# АУЫРЛЫ САҠТА...

## майлы балыҡ аша

■ RIKEN мейе институты хеҙмәткәрҙәре үткәргән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ауырлы саҡта майлы балыҡ ашау балаларҙа шизофрения үҫеше хәүефен түбәнәйтә. Ғалимдар һынауҙарҙы ҡомаҡтарҙа үткәргән. Әсә ҡарынында саҡта омега-3 майлы кислотаһы етешмәгән ҡомаҡтар өлкән йәштә шизофрения симптомдарына эйә була. Омега-6 майлы кислоталары дефициты ла ошондай һөҙөмтәләргә килтергән. Майонез, көнбағыш орлоҡтары, етен майы был кислотаға бай. Ғалимдар психика менән бәйле проблемалар һәм ҡарында саҡта майлы кислоталар етешмәү араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Шуға ла ауырлы ҡатындарға был яңылыҡҡа иғтибар итергә кәрәк.

■ Бесәй, эт кеүек йорт хайуандары менән бергә йоҡларға кәңәш итә Майо клиникаһы белгестәре. Шул саҡта йоҡоғоҙ яҡшыраҡ туйыр, тигән фекерҙә улар. Һынауҙарҙа 40 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың ҡайһылары 5 ай буйына эттәр менән бер бүлмәлә йоҡларға тейеш булған. Кешеләр ҙә, эттәр ҙә төндәге әүҙемлекте күҙәтеүсе датчик йөрөткән. Эттәр менән бергә йоҡлаусылар төндә һирәгерәк уянған, улар урындарында һирәгерәк борғоланған, тимәк, яҡшыраҡ йоҡлаған. Әммә кеше этен ҡосаҡлап йоҡлағанда йоҡо сифаты түбәнәйгән. Эт һеҙҙең менән бергә карауатта йоҡларға тейеш түгел, ти белгестәр. Был тәжрибә кеше менән йорт хайуанының бәйләнешен нығытҡан. Билдәле булыуынса, йорт хайуандары кешенең психик торошона ыңғай йоғонто яһай. Улар стресс кимәлен түбәнәйтә.

■ Португалия белгестәре бөйөрө сирле 2300 кешене тикшереп, улар араһындағы кофеинлы эсемлектәр яратыусыларҙың ниндәй ҙә булһа сәбәп менән үлеү хәүефе 24 процентҡа түбән булыуын асыҡлаған. Ғалимдар әлегә быны сәбәптәрен асыҡлай һәм фәнни нигеҙҙә раҫлай алмаған. Әммә Саутгемптон университетында үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, ҡәһүә бауыр яман шеш хәүефен түбәнәйтә икән. Аныҡыраҡ әйткәндә, ҡәһүә гепатоцеллюляр карциноманан - бауыр яман шешенең тәүге формаһынан һаҡлай ала. Шуға ла ҡәһүә кеүек кофеинлы эсемлектәрҙе зарарлылар исемлегенә индерергә ашыҡмаҫҡа кәрәктер, моғайын.

■ Айова университеты ғилимдары билдәләүенсә, кеше 2 сәғәт төнгө йоҡоһон юғалта икән, ул асыулыға әйләнә. Йәғни, хәүефләнеү, күңелһеҙләнеү, үҙеңде бәхетһеҙ тойоу йоҡо туймау менән бәйле. Һынауҙарҙа ҡатнашыусы 42 кеше төркөмдәргә бүленгән. Тәүге төркөм өйрәнгән ғәҙәте буйынса йоҡлаған (яҡынса 7 сәғәт), икенсеһе ике көн дауамында төнгө йоҡоно 2-4 сәғәткә бүлгән. Улар сама менән 4,5 сәғәт йоҡлаған. Эксперименттың әүҙем фазаһынан һуң улар төрлө ризыҡтарҙы баһалаған, ошо уҡ мәлдә ҡолаҡҡа бик ятып бөтмәгән төрлө тауыштар тыңлағандар. Был тауыш уларҙы асыуландырырға тейеш булған. Икенсе төркөмдә кире тойғолар күберәк күҙәтелгән. Матур моңло йыр ҡуйғандан һуң да уларҙың асыуы үтмәгән. Йоҡо туймау бына ошондай эҙемтәләргә алып килеүе бар.

*ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙЕМ*

# БАШ ҠАЛАНЫҢ...

## милли рухиәт үҙәге

**1970 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында ҡала балаларын башҡорт телендә уҡытҡан тәүге мәктәп асылыуы оло мәҙәни һәм сәйәси ваҡиға булараҡ ҡабул ителә.**



1960 йылдарҙа баш ҡала үҫә, башҡорт ғаиләләре лә күбәйә. Илебеҙ Бөйөк Октябрь революцияһының 50 йыллығын байрам итә, Башҡорт автономиялы республикаһы төҙөлөүгә шулай уҡ 50 йыл тирәһе була, башҡорт телен дәүләт теле тип иғлан иткән беренсе указ сығыуға ла ярты быуат ваҡыт үтеп бара. Әммә баш ҡалабыҙҙа бер генә мәктәптә лә башҡорт теле дәрестәре ҡаралмаған. Был турала ауыҙ асыу ҙа ҙур батырлыҡ, хатта дыуамаллыҡ һәм хилаф эш булып күренә. Ошо батырлыҡты ҡылыусыларҙың - Хөкүмәт етәкселәренә күмәк хат ойоштороп, беренсе башҡорт мәктәбен асыуҙы юллап, был изге хыялды тормошҡа ашырыуҙа ҙур роль уйнаған Иҙел Агишев, Булат Рафиҡов, Әнүр Вахитов, Вәхит Иҫәнғолов, Йыһат Солтанов, Рәми Ғарипов, Әмир Сиражетдинов, Хәниф Вәлиев, Зөфәр Әбсәләмов, Мөхәмәт Исҡужин, Әҙеһәм Исҡужин, Ким Әхмәтйәнов, Шакир Бикҡолов, Диҡҡәт Бураҡаев, Әкрәм Бейеш, Шәрифйән Ишемов, Нияз Мәжитов, З.Ишмөхәмәтов, Зиннур Ураҡсин, Рәшит Солтангәрәеваарҙың исемдәрен телгә алып китеү кәрәк.

Шулай итеп, Өфө ҡалаһында башҡорт мәктәбе асыуҙы юллау 1960 йылдар уртаһында башлана. 1965 йылда 1-се мәктәп-интернатта бер синыф асыла. Ике йыл үткәс, ата-әсәләр юллауы менән, 91-се мәктәптә башҡорт башланғыс синыфтары эшләй башлай. 8-се балалар йортонда ла башҡорт кластары була. Венера Ураҡсина, Роза Ишемова, Рәзинә Фәрхетдинова, Бикә Сафиуллина, Ҡәфиә Ҡоҙаҡаева, Бибинур Билалова, шулай уҡ Зәкиә Бикмәтова, Миңлебикә Мирғәлиева, Дәнүсә Ханнановалар ошо мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәрен алып барыусы тәүге уҡытыусылар була. Ниһайәт, 1970 йылда Достоевский урамында төҙөлгән 20-се мәктәпте Өфө ҡала башҡорт мәктәбе итеп асалар. Бығаса төрлө ерҙә барлыҡҡа килгән башҡорт кластары шунда бергә йыйылып уҡытыла башлай..

20-се һанлы Өфө ҡала башҡорт мәктәбенең тәүге директоры Туғаҙаҡ Йәһүҙин, беренсе завучы - Лениза Хәсәнова була. 1-се һанлы республика мәктәп-интернатында эшләп йөрөгән Гөлкәй Ҡужина, Миләүшә Вәлиева, Нурия Хөсәйенова, Таңһылыу Ғәниева, Сания Ғәйнетдинова, Мөхәммәт Нурмөхәмәтов, Луиза Ғибәҙәтова, Ғәҙилә Әсәнова, Марат Хафизов, Зөбәйҙә Бикбулатова кеүек тәжрибәле уҡытыусылар яңы мәктәпкә күсеп, эштәрен дауам итә.

Башҡортостандың баш ҡалаһында башҡорт мәктәбе асылған көндәрҙән һуң илле йыл үтеп тә киткән. Уны асыр өсөн янып йөрөгәндәр был тарихи ваҡиғаға бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарай, үҙҙәренең хаҡ юлдан йөрөгәненә шөкөр итә, был легендар уҡыу йортонда эшләүҙәрен яҙмыш бүләге тип иҫәпләй. Күптәре фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күскән, уларҙы аят менән иҫкә алайыҡ. Уларҙың берҙәм булып күтәрелеп, туған телдә уҡыу йорто асҡан саҡтарын һағынып һөйләп ҡалдырған хәтирәләре үткәндәргә - аманат, киләсәккә - салауат.

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

# ҠАҘ ҮРСЕТЕҮҘЕҢ ДӘ...

## үҙ сере бар шул

**Тажзәхмәт таралыу сәбәпле, былтыр бер ҡайҙа сығып йөрөмәнем. Нимә кәрәк, шуны балалар алып килеп торҙо. Килен дә, бер кемгә барма, бер кемде индермә, тип, мәтриләп кенә торғас, бер йыл буйы тигәндәй донъя менән бәйләнешем урам яҡ тәҙрә аша ғына булды.**

Күптән түгел балалар күрше ауылға әхирәтемә алып барып килде. Көн оҙоно йәш саҡтарҙы иҫкә төшөрөп ултырҙыҡ. Бик матур йәшәй ул, килене һәм улы менән көн итә. Әммә балалыҡ дуҫым һөйләшкән арала хәҙерге тормошҡа зарланып та алды. Юҡ, замандың ауырлығына, элекке рухи ҡиммәттәрҙең баҙыҡлана барыуына түгел, ә йәш быуындың ололар һүҙенә, кәңәштәренә ҡолаҡ һалмауына борсолдо.

"Элек ҡаҙҙы ла, өйрәкте лә үҙебеҙ баҫтырып, көтөп үҫтерә торғайныҡ. Хәҙер һатып алалар ҙа, ҡураға бикләйҙәр ҙә, шунан ҡош-ҡорт аҫрайбыҙ, тигән булалар. Инкубаторҙан һатып алған ҡаҙ-өйрәктең ите үҙең баҫтырғандыҡына етәме ни инде? Йыл һайын әйтәм, йорт ҡаҙы табып, үҙебеҙ үрсетәйек, үҙем көтөрмөн, тием. Юҡ, килтереп һатҡандарын көтөп ултыралар инде шунда", - тине ул.

Эйе, беҙҙең заманда һәр йортта тиерлек үҙҙәре себеш баҫтырып сығара торғайнылар. Үҙенә күрә күңелле шөғөл ине ул. Күрше-тирә кәңәшләшеп, кәрәк булһа, йомортҡаларын алмашып, бүлешеп йәки "ҡул арты китә" тигән ырымға ышанғандар үҙҙәре баҫтырып сығарып бирә торғайны.

Эйе, беҙҙең заман эшләп үҫте, тырышып донъя көттө. Картуф баҡсаһы ла әлеге кеүек ус аяһындай түгел ине, колхоз сөгөлдөрөн дә гектарлап алып утаныҡ. Ырҙынға иген елгәрергә лә ҙур теләк менән йөрөнөк. Унда күңелле лә булды, эшкә лә өйрәндек, аҙ ғына булһа ла аҡсаһы ла була торғайны.

Бөгөнгө балаларҙың күбеһе сөгөлдөр утауҙың нимә икәнен дә белмәй. Һуңғы бер нисә йыл инде сүп үләненән ҡотолоу өсөн баҫыуға гербицид һибәләр. Өҫтәүенә, сөгөлдөрҙө лә хәҙер сәсеп бармайҙар, сөнки илебеҙҙәге шәкәр заводтарының күбеһе шәхси ҡулдарға күсте һәм... ябылып бөттө. Хәҙер шәкәр ҡомон күбеһенсә сит тарафтарҙан ташыйҙар. Заманында бөтә Советтар Союзына гөрләп торған күрше Мәләүез шәкәр заводы ябылыуға ла ике йылдан ашыу ваҡыт уҙҙы.

Әхирәтемдең бөгөнгө аҙыҡтың сифатһыҙ, тотош химиянан тороуы тураһында фекере бер нисә тапҡыр ҡошҡорт, һыйыр итенә барып тоташты. "Бөгөн телевизорҙан бер туҡтауһыҙ ниндәйҙер "мәрмәр итте" маҡтайҙар. Уны, икмәк ағаста үҫә, тигән уйҙырмаға ышанған кешеләр генә алалыр, тип уйлайым. Инкубаторҙа сыҡҡан ҡаҙ бәпкәһенеке ауылдыҡынан нисек айырылһа, баҙарҙан һатып алған һыйыр ите лә шулай айырыла. Эй, үҙебеҙ үҫтергән ҡаҙ һурпаһын эскем килә лә инде..." тип ҡуйҙы ул.

***Йәмәғәт эшмәкәре, тел ғалимы Иҙел Агишев һөйләгәндәрҙән:*** 1960-1970 йылдарҙа Башҡортостанда милли мәктәптәр стихиялы рәүештә русса уҡытыуға күсә башлағайны - юғарынан күрһәтмә шулай булды. Шул осорҙа Өфөлә башҡорт мәктәбе асыу идеяһы тыуып, шуны тормошҡа ашырыу үҙе ҙур батырлыҡ, мөһим сәйәси әһәмиәткә эйә ғәмәл ине. Башҡорт интеллигенцияһы бөтә ил менән руслаштырыуға күскән осорҙа Башҡортостандың баш ҡалаһында тәүге башҡорт мәктәбе асырға тигән идеяны алға һөрҙө. Атаәсәләр, балаларыбыҙ башҡортса уҡып, назан ҡалыр, вуздарға инә алмаҫ, тип, бер ҙә ҡурҡманы. Ниһайәт, башҡорт мәктәбе асылды!

20-се мәктәп өсөн бүленгән бина артыҡ ҙур булманы - 625 урынлыҡ. Беренсе ҡатында интернат булды, икенсе ҡатта класс бүлмәләре урынлашҡайны. Беренсе йылда уҡ 555 бала йыйып алдыҡ. Мәктәп асырға мөмкинлек биреһәләр ҙә, мәктәптә балалар менән тултыра алмаҫтар, башҡорттар үҙ туған телендә уҡыуҙы өнәмәҫ, тип уйланы ҡайһы берәүҙәр. Хатта был хаҡта беҙҙең йөҙөбеҙгә бәреп, мыҫҡыллап әйтеп китеүселәр ҙә булды. Ә беҙ мәктәптә тәүге йылда уҡ комплектланыҡ та ҡуйҙыҡ. Йәмғеһе 21 класс ойошторолдо. Ул саҡтағы мәғариф министры Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина ата-әсәләрҙе был белем усағына ныҡлап йәлеп итеү өсөн башҡортса уҡытыу менән бергә, инглиз теле йүнәлешен дә индерәйек, тигән тәҡдим әйтте. Беҙ ризалаштыҡ.

Мәктәп асылыуын асылыр, ләкин уны эшләтеүе бик ауыр буласаҡ, тип иҫкәртеп тә ҡуйғайнылар алдан, сөнки уның эшләмәүен теләгән етәкселәр бар ине. Ысынлап та, мәктәп эшләй башлау менән тикшереү артынан тикшереү китте. Ике йылдан иһә уҡытыу процесына ҡыҫылыу һәм бәйләнеү, русса уҡытыуға ҡайырыу башланды. Ошо ҡыҫым-баҫымға ҡаршы килә алмай, 1972 йылда ҡалағы берҙән-бер башҡорт мәктәбендә лә русса уҡытыуға күсергә мәжбүр булдылар. Күсмәйенсә лә мөмкин түгел ине, сөнки башҡортса дәреслектәр сығыуҙан туҡтаны. Шулай булһа ла 1-4-се синыф балаларын башҡортса уҡытыу дауам итте. Мәктәпкә директор булып Хисам Салауат улы Хәйбуллин килгәс, уҡытыу йәнә башҡортсаға күсерелде. Тик яңы етәксегә еңелдән булманы, уның һәр аҙымын күҙәтеп, ошаҡлап торҙолар. Әммә Хисам Салауат улы эштән киткәнсе ошо, башҡорт мәктәбендә башҡортса уҡырға тейештәр, тигән принципҡа тоғро ҡалды.

Кешеләрҙең психологияһы үҙгәрмәй икән ул. Бөтә халыҡ бер яҡҡа ҡарағанда, бер төрлө уйлағанда ла, бер-ике кешенең кире һүҙе уларҙы икенсе яҡҡа бороп алып китеүе бар. Бигерәк тә бағы әҙселек хөкүмәт исеменән сығыш яһаһа, бөтә фекер үҙгәрә лә ҡуя. 20-се мәктәп тарихында ла былдай хәлдәр булды, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Мәҫәлән, ата-әсәләр барыһы ла башта башҡортса уҡытыуға риза булды. Мәктәп менән ҡыҙыҡһыныу бик көслө ине. Өфөнөң Черниковка, Инорс кеүек алыҫ тарафтарынан да эркелешеп балалар ағылды. Мәктәп асылыр алдынан мин үҙем документтар йыйып ултырҙым. Ҡатнаш ғаиләләрҙән булған ҡайһы бер атаәсәләр мәктәпкә уҡырға килгәндә бик риза булып ғариза яҙҙы ла, аҙаҡ икенсе позицияға күсте лә китте һәм тора-бара улар мәктәп коллективын: "Нишләп балаларҙы башҡортса ғына уҡытаһығыҙ?"- тип атакалай башланы. Ә табыла бит ул арала ҡылбыуындар, уларҙың һүҙенә төшөп, нисәмә йыл буйы көрәшеп асҡан башҡорт мәктәбенә ҡаршы сығыусылар, иҫ китмәле аңһыҙлыҡ, милли һуҡырлыҡ күрһәтеүселәр ҙә булманы түгел, булды. Йыл һайын ошо башҡорт мәктәбен тамамлаусыларҙың барыһы ла тиерлек юғары уҡыу йортона инеү факты ла уларҙың ауыҙын яба алмай... Ундайҙар әле булһа бар арабыҙҙа...

***20-се башҡорт мәктәбенең тәүге завучы Лениза Хәсәнова һөйләгәндәрҙән:*** Ошо мәктәптә ойоштороу йылдарында мәғариф министры Фатима Мостафинаның ярҙамы ифрат ҙур булды. Шундай ярҙамды тойған өсөн дә беҙ бында риза булып, ҡанатланып эшкә килдек. Фатима Хәмит ҡыҙы беҙҙе махсус йыйып ала ла, һәр беребеҙ менән ентекләп танышa һәм бик кәрәкле кәңәштәр бирә торғайны. Ҡағиҙәләр менән генә эшләргә һәм алға алған маҡсат-пландан һис тайпылмаҫҡа өндәне. Бурысығыҙ - уҡытыу ғына түгел, тәрбиә эшен дә атҡарыу, сөнки ҡала балалары башҡортса белмәй, ғөрөф-ғәҙәтте аңламай, йырламай, бейемәй, тимәк, шул юҫыҡта эшләүгә лә көс һалырға тура киләсәк, ти торғайны. Мәктәпкә уҡытыусылар йәлеп итеү бик еңелдән булманы. Мәғариф идаралыҡтары ярҙам итмәй, киреһенсә, һәр эшебеҙҙе шик аҫтында тота, "Ниндәй маҡсат менән ойошторола был мәктәп?", "Партия рөхсәт итәме?" тигән һорауҙар менән теңкәгә тейәләр. Эшкә килгән һәр уҡытыусы алдына ошо мәктәпкә үҙенең балаһын да килтереү шарты ҡуйылды. Детдом балалары менән бер ҡаҙанда ҡайнап үҫте беҙҙең балалар. Улар детдомдыҡыларҙан үҙҙәрен коллектив эсендә тоторға, берберeһе менән аралашырға, ә тегеләр ҡаланыҡыларҙан үткерерәк булырға өйрәнде. Улар һаман да дуҫ йәшәй.

Беҙ мәктәптә асҡанда балалар инглизсә, русса, башҡортса яҡшы белергә тейеш, тигән маҡсат ҡуйғайныҡ. Шуға күрә ул предметтарға талап та ҙур булды, сәғәттәр ҙә күп бүленде. Университеттан Лена Саяхова, Мөсәлиә Хәйруллина кеүек рус теле буйынса ғалимәләр, инглиз теле буйынса белгестәр килеп, һәр бер уҡыусыға айырым заданиелар биреп, һынау үткәрә торғайны. Ә башҡорт теле буйынса ғалимдар, яҙыусылар, әлбиттә, мәктәптән сыҡманы тиерлек.

Шулай итеп, ошо мәктәпкә нигеҙ һалып, байтаҡ ғүмеремде, көсөмдө уны йәшәтеүгә биреүемә бер ҙә үкенмәйем. Йылдарым заяға үтте, тип тә әйтә алмайым. Беҙҙең мәктәптә уҡыған балалар яҡшы белемле булып, илгә, республикаға, халыҡҡа хеҙмәт итә, башҡорт мәктәбе исемен аҡлайҙар. Мәктәпкә Фатима Мостафина исеме бирелгәндә бик шатландым. Сөнки ул был мәктәпкә нигеҙ һалыусы, көс, ғәйрәт биреүсе кеше. Һәм ошо исемде аҡларға тырышырға кәрәк. Башҡа башҡорт гимназия, лицейҙар араһында беҙҙең мәктәп нисектер юғалып ҡалған, ябай ҡала мәктәбенә әйләнеп барған кеүек. Улай булырға тейеш түгел.

**Сәрүәр СУРИНА**
**әҙерләне.**



Мин үҙем дә күпләп үҫтерҙем ҡаҙҙы йәшерәк саҡта. Өҫдүрт оя ҡалдырған ваҡыттар ҙа булды. Итенән бигерәк мамығына ҡыҙыҡтым мин. Алты балаға бирнәгә мендәр әҙерләргә лә кәрәк ине, бәпестәре тыуһа, тағы бүләккә мендәр-яҫтыҡ әҙерләйһең. Хәҙерге кеүек, ҡаҙҙы ҡайнар һыуға тығып йолҡмай инек, марляға төрөп, үтекләп, һаҡ ҡына эшкәртә инек. Әллә шуға ла ите тәмле булдымы икән, тим, ҡайнар һыуға тығып, майын бешермәгәс, тим инде.

Тап ошо март айында инә ҡаҙ баҫырға ултырта торғайным. Уның да үҙ рәте-сираты бар. Оялағы ҡаҙ ике-өс көн тирәһе тормаһа, уға яҡын килһәң, муйынын һуҙып, суҡырға итһә, ыҫылдаһа, асыуланһа, кисен ипләп кенә аҫтына йомортҡаларын һалырға кәрәк. Хәҙерге һимаҡ, йылы һарай юҡ ул ваҡытта. Урындыҡ аҫтында ике, карауат аҫтарына берәр оя ултырта инем. Ҡарап ҡына торорға кәрәк, ваҡытында ашатыу, эсереү мөһим. Ояға йомортҡаны күп һалырға ла ярамай, 10-12-нән артыҡ булырға тейеш түгел. Шулай ҙа мин гел таҡ һанды ҡалдырырға тырыштым, йәғни 12-не түгел, ә 13-тө һалдым, 15-те лә һалғаным булды. Артығын һалһаң, барыбер сыҡмай торғайны. Ҡарап ҡына торһаң, бер йомортҡаны ла әрәм итмәй, себештәрҙе сығарып алырға мөмкин. Сығарып, ата ҡаҙға ҡушыу менән дә эш бөтмәй әле ул, уларҙы бер ай тирәһе күҙ яҙлыҡтырмай көтөргә, ҡарғанан, төйләгәндән һаҡларға кәрәк.

Әйткәндәй, ата ҡаҙҙы ла һайлай белеү мөһим. Уҫал булһа, себештәр яҡлаулы була. Йомортҡа сифатлы булһын өсөн ҡаҙ ғаиләһен дөрөҫ формалаштырыу ҙа кәрәк. Бер нисә инә ҡаҙ ҡалдырырға уйлаһағыҙ, улар бер йәштә булмаһын, береһенә ике йәш булһа, икенсеһе олораҡ булһын. Йыл һайын булмаһа ла, йыл аша яңыртып барығыҙ. Ата ҡаҙ яҡшы булһа, уны биш-алты йылға тиклем аҫрарға мөмкин.

Ҡаҙ һыу ярата, әҙерәк үҫә төшһә, минекеләр йылға буйынан ҡайтып инмәй торғайны. Бында тәрән аҡыллы атайолатайҙарыбыҙға рәхмәт әйтергә кәрәк - улар ауылды нигеҙләгәндә йылға-күлгә яҡын урын һайлаған, әйтерһең дә, киләсәктә уларҙың варисҙарына күпләп һыуҙа йөҙөүсе ҡошҡорт үҫтерергә мөмкин буласаған күреп белгән.

Үҙ хужалығында үҙ инә ҡаҙың һалған йомортҡанан баҫтырып сығарған бәпкә менән инкубаторҙа сыҡҡан себештән үҫтереп алған ҡаҙ итенең түмен сағыштырып булмаған кеүек, уларҙың организм өсөн файҙаһында ла ер менән күк кеүек айырма бар. Һуңғыһының ите яһалма иттән әллә ни айырылмай. Был ысул аслыҡ осоронда үҙен-үҙе аҡлар ине, ә бөгөнгө тәбиғи ризыҡҡа кире ҡайтҡан мәлдә тәүге ысулды ла күҙ уңынан ысҡындырмаһаҡ ине. Һикһәнгә етеп барған әхирәтемдең борсолоуҙары ла ошо нигеҙҙә ине.

**Әсмә ХӘЛИТОВА.**
**Көйөргәҙе районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТЕЛӘГӘНЕҢӘ ӨЛГӘШЕРГӘ ӨЙРӘН

Ғөмүмән, үҙ теләктәреңде аныҡ һүрәтләп, яҙып ҡуйырға ҡыйынһынма. План төҙө лә уның пункттарын эре хәрефтәр менән яҙып ҡуй. Машинкала баҫма, мотлаҡ ҡул менән яҙ. Көн һайын уға күҙ һал. Тормошондағы иң мөһим алты өлкәнән маҡсаттар билдәлә. Уларҙы түбәндәгесә билдәләргә мөмкин:

Карьера: Эшеңдә нимәгә өлгәшергә теләйһең?

Финанс: Төплө уйла, күпме аҡсаң булыуын теләйһең?

Физик үҫеш: Ниндәй физик үҫеш программаһына эйәрергә теләйһең?

Интеллектуаль үҫеш: Тормошондағы ниндәй өлкәләрҙе ныҒыраҡ тикшерергә теләйһең?

Рухи үҫеш: Рухи өлкәлә нимәгә ынтылаһың?

Ғаилә: Үҙ ғаиләңдә ниндәй мөнәсәбәттәр булыуын теләйһең?

Был маҡсаттар оҙайлы ваҡытҡа һәм ҡыҫҡа ваҡытҡа билдәләнергә тейеш. Бүлеп, исемлек төҙө лә, кисекмәҫтән эшкә тотон.

Һин үҙләштерергә тейешле мөһим һабаҡтарҙың береһе - әлеге мәл, бөгөнгө көн менән йәшәргә өйрәнеү. Әлеге мәл - ул беҙҙең ҡулдағы ваҡытыбыҙ, әммә беҙ уны, үткәнде төҙәтергә йәки киләсәкте көтөп йәшәргә маташып, файҙаһыҙға әрәм итәбеҙ. Планлаштырырға кәрәк булһа ла, алдағы көн менән йәшәү - ул борсолоу, уңышһыҙлыҡтар тыуҙырыу ғына. Киләсәк менән йәшәп, кеше көндәлек ысынбарлыҡтан алыҫлаша.

Тигеҙ һәм ижади тормош алып барыу өсөн һин бөгөнгө эштәреңдә мөмкин тиклем тырышып атҡарып сығырға өйрәнергә тейешһең. Ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, бөгөнгө бурысыңды еренә еткереп үтәргә өйрәнеп, һин шәхесеңдә үҫтереү өсөн мөһим һабаҡ үҙләштерәсәкһең.

Кеше йыш ҡына, икенсе эште уңышлыраҡ башҡарып сыға алыр инем, тип уйлап яңылыша. Ысынында, һәләттәрең хәҙерге эшең талаптарынан юғарыраҡ булыуын иҫбатламайынса тороп, һиңә башҡа мөмкинлектәр бирелмәйәсәк.

План төҙөп һәм маҡсаттар билдәләп, һин медитация яһарға һәм Юғарыға андан кәңәш һорарға тейешһең. Уйлаған идеяларыңды Уның иғтибарына еткер һәм һиңә дөрөҫ идея һайлауҙа йүнәлеш биреүҙе Уға тапшыр. Тиҙҙән һин ни эшләргә кәрәклеген тойорһоң. Үҙ һиҙемләүеңә ышан. Ул бер ваҡытта ла һине алдамай.

Юғары андан һин бер ваҡытта ла яңы йорт, аҡса йәки автомобиль һорама. Был әйберҙәрҙе алыуға ирешер өсөн кәрәкле белем һора. Әгәр рәссам, артист, бизнесмен йәки башҡа берәй кем булырға теләһәң, был маҡсатыңа өлгәшеү өсөн сара һора. Ысын мәғәнәһендәге тәрән аҡылға эйә булып ҡына һин теләгеңде тормошҡа ашырырһың.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

✔ *Ҡатын-ҡыҙ бер ҡасан да аҡса өсөн кейәүгә сыҡмай. Сөнки быныӊ алдынан ғашиҡ булырға уларҙың аҡылы етә.*

*(Чезаре Павезе).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 2 АПРЕЛЬ - ХАЛЫҠ-АРА БАЛАЛАР КИТАБЫ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**12-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ябаға. Алтаҡта. Фирғәүен. Мәҙхиә. Ҡыйыҡ. Игеҙ. Әжәл. Әрем. Орлоҡ. Сәс. Марш. Әхәт. Нужа. Йәннәт. Ван. Ғаилә. Тофу. Киев. Актив. Абыз. Әрйә.

**Вертикаль буйынса:** Ҡотошов. Фәйзуллин. Ҡалҡанут. Ашуғ. Олатай. Әнис. Битләү. Ағуна. Әсә. Кәзә. Нәҙер. Игәт. Артыш. Инәй. Мөхәмәтйәнов. Минск. Хыял. Әбдрәшитов.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# УЛ БЫЛАЙ ҘА ХАЛЫҠ ЯҘЫУСЫҺЫ



**Республиканың мәҙәниәт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре Яныбай Хамматовҡа үлгәндән һуң (1925 - 2000) Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы исемен биреү өсөн сығыш яһай. Ошо тема республика телевидениеһында яңғырағандан һуң интернетта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте исеменә петиция башланды.**

Яныбай Хамматов 20-ләгән роман, тиҫтәләгән повесть-хикәйә яҙған. Ул - "Бөртөкләп йыйыла алтын", "Аҡман-тоҡман", "Йәшенле йәй", "Юрғашты", "Руда", "Йондоҙҙар нисек ҡабына", "Тыуған көн", "Төньяҡ амурҙары", "Башҡорттар китте һуғышҡа ..." һәм башҡа әҫәрҙәр авторы. Уның әҫәрҙәре рус, украин, әзербайжан телдәренә тәржемә ителгән. "Яныбай Хамматов тере сағында уҡ ысын халыҡ яҙыусыһы булды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был исем уға рәсми рәүештә бирелмәне. Тарихи ғәҙеллекте тергеҙергә һәм уны, үлгәндән һуң булһа ла, "Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы" исеме менән бүләкләргә кәрәк. Яҙыусының китаптары Башҡортостан китап нәшриәтендә, "Современник" һәм "Воениздат" нәшриәттәрендә донъя күрҙе. Ошо әҫәрҙәр һаман да бик популяр. Ул "Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы" тигән юғары исемгә лайыҡ", - тип яҙа петиция авторы, журналист Баныу Ҡаһарманова.

1996 йылдың 18 апрелендәге указға ярашлы, "башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүгә күп көс һалған, халыҡ араһында ҙур популярлыҡ менән файҙаланған тәрән идеялы һәм юғары художестволы әҫәрҙәр ижад иткән, әүҙем ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлек алып барған күренекле яҙыусыларға" ошо маҡтаулы исем бирелә.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 апрель "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+

**6 апрель "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 18.00 12+

**7 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

**8 апрель "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

**12 апрель "Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс. 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 апрель Премьера! "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 14+

**9 апрель "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 14+

**11 апрель "Аладдин"** (И. Казакова), мажаралы әкиәт. 12.00 6+

**"Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 18.00 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**10 апрель "Мөхәббәт көсө"** Фәдис Ғәниев төркөмө концерты. 18.00 6+

**"Оркестр солисы"** концерт. 18.00 6+

**11 апрель "Weekend с органом"** (Э. Хәйретдинова). 15.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**8 апрель** 12.00, 16.00, **11 апрель** 16.00 **"Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 0+

**10 апрель "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00, 16.00 0+

**11 апрель "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12.00, 14.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**6 апрель "Минең ҡәйнәм - әүлиә"** (С. Белов), комедия. 16+

**7 апрель Беҙ - Стәрлетамаҡта! "Ғүмерҙең бер мәле"** (Н. Мусин), фантастик төш. 16+

**8 апрель Беҙ - Красноусолда! "Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+

**9 апрель Беҙ - Күмертауҙа! "Голубцы"** (А. Финк), комедия. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**8 апрель "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 16+

**9 апрель "Һеҙгә әйтер һүҙем бар"** Ришат Хәмитовтың концерты. 6+

**10 апрель "Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 12+

**11 апрель "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), әкиәт. 12.00 0+

## Сибай театр-концерт берекмәһе

**"Донъя матур, донъя шундай матур"** концерт программаһы менән

**5 апрель** - Дәүләкән,

**6 апрель** - Әлшәй районы Раевка,

**7 апрель** - Миәкә районы Илсеғол,

**8 апрель** - Стәрлебаш районы Иҫке Ҡалҡаш ауылы сәхнәләрендә. 6+

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# РӘМИ ФИЛЬМЫ



**Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа арналған фильмдың ижади төркөмә 29 мартта эшкә тотондо. "Шағир көндәлеге" - республика тарихында халыҡ ярҙамына таянған тәүге фильм. 2019 йылдың авгусында фильм тураһында йәмәғәтселеккә иғлан ителде һәм ошо ваҡыттан алып халыҡтан 1 миллион һумдан ашыу аҡса йыйылды. Пандемияға бәйле фильм буйынса эштәр туктап торҙо һәм 2020 йылдың декабрендә йәнә тергеҙелде.**

"Башинформ"да ошо кино тураһында матбуғат конференцияһы ойошторолдо. Фильмды Башҡортостан Башлығы, Мәҙәниәт министрлығы, Ә.Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы, Свердловск киностудияһы һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы булышлығында билдәле башҡорт кинорежиссеры Булат Йосопов төшөрә. "Минең өсөн Рәми Ғарипов - үҙен, телен, мәҙәниәтен, тарихын үҫтереү менән шөғөлләнгән кешенең сағыу вәкиле. Ул - үҙенең мәҙәниәтенә донъяныҡын йәлеп иткән цивилизатор: Мәскәүҙә уҡыған, тәржемәсе булған, тотош мәктәп булдырған, журналдар аҫҡан. Минең өсөн ул юғары мәҙәниәт, ижад, йәшәү стандарты булып тора. Үҙенде юғалтмау бик ҡатмарлы, ә ул бер ҡасан да үҙлеген юғалтмаған. Рәми Ғариповтың шиғриәтенә уның көндәлектәре аша килдем", - тип һөйләне кинорежиссёр Булат Йосопов.

Рәми Ғарипов тураһында тулы метражлы нәфис фильм - "Беренсе Республика" трилогияһының һуңғы өлөшө. Уға "Бабич" һәм "Беренсе Республика" картиналары инә, өсөнсө өлөшө - "Шағир көндәлеге". Трилогия республиканың күренекле мәҙәниәт эшмәкәрҙәренә бағышланған. Режиссер трилогияның тәүге ике өлөшөндә тәҙелгән команда менән эшләй. Сценарий авторы - Гөлсәсәк Саламатова.

Шағирҙың улы Азамат Ғарипов әйтеүенсә, атаһы һәм үҙҙәренең ғаиләһе тураһында һәр эште йөрәгенә бик яҡын ҡабул итә, фильмда ла акценттарҙы дөрөҫ ҡуйыу мөһим. Сараға килгән ҡунаҡтар ҙа ижади төркөмгә теләктәрен еткерҙе. Башҡортостандың халыҡ шағиры Кәҙим Аралбай шул замандың күп кенә көсөргәнешле мәлдәрен хәтергә алды: "Рәми Ғарипов йәшләй, 45 йәшендә, китеп барҙы. Уның тормошонон фажиғәле булыуы дәүер, партия диктаты менән бәйле. Фильмды күңелгә үтеп инерлек итеп төшөрөгөҙ", - тине яҙыусы.

Фильмдың бюджеты - 23,3 миллион һум. Әлеге ваҡытта ул 70 процентҡа тәьмин ителгән, 16 миллион һумлыҡ дәүләт ярҙамы күрһәтелгән. Продюсер Леонид Филинов картина авторҙарының ябай тамашасыларға, меценаттарға, эшҡыуарҙарға һәм дәүләткә таяныуын билдәләне. Барлыҡ мәғлүмәт -проекттың сайтында.

# ҠУРАЙСЫЛАР ИҒТИБАРЫНА



**Ғата Сөләймәнов исемендәге Республика Ҡурай байрамына ғаризалар ҡабул ителә башланы. Быйыл ул 21-22 майҙа Октябрьский ҡалаһында 20-се тапҡыр ойошторола.**

Унда үҙешмәкәр һәм профессиональ солистар, ҡурайсылар ансамблдәре ҡатнашырға мөмкин. Ҡатнашыусыларҙың башҡарыу оҫталағы өс йәш категорияһында баһалана. 12 йәшкә тиклемгеләр һәм 12-16 йәшлектәр бер турҙа ярыша, ике музыкаль әҫәр - оҙон көй һәм ҡыҫҡа көй уйнай. 16 йәштән өлкән ҡурайсылар өсөн конкурс ике турҙа үткәрелә. Был йәш категорияһында һәүәҫкәр солистар үҙҙәренә оҡшаған дүрт әҫәр башҡара. Ҡурай класы буйынса урта һәм юғары профессиональ белем тураһында дипломы булған профессионалдар оҙон көйҙә уйнап күрһәтергә тейеш, шул иҫәптән билет буйынса. Улар - 100 әҫәр, араларында "Ашҡаҙар", "Һандуғас", "Сибай", "Буранбай", "Томан" һәм башҡалар бар. Ҡурайсылар ансамблдәре бер турҙа, ике йәш категорияһында ярыша.

Ғата Сөләймәнов исемендәге Республика Ҡурай байрамы 2000 йылдан уҙғарыла. Сара милли уйын ҡоралы ҡурайҙы пропагандалауға һәм популярлаштырыуға, башҡарыу традицияларын һаҡлауға һәм артабан үҫтереүгә, һәләтле башҡарыусыларҙы асыҡлауға йүнәлтелгән. Ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Октябрьский ҡалаһы хакимиәте.

Ҡурай байрамында ҡатнашыу өсөн ғаризалар ontrcnt @bk.ru, oktb-kultura@mail.ru электрон адрестары буйынса 15 майға тиклем ҡабул ителә. Ойоштороу мәсьәләләре буйынса 450103, Өфө ҡалаһы, Зәйнәб Биишева урамы, 17/2, Республика халыҡ ижады үҙәге адресы буйынса мөрәжәғәт итергә. Телефон: 8 (347) 289-65-50, Әхмәтйәнова Эльвира Искәндәр ҡыҙы. Байрам тураһында положениены Республика халыҡ ижады үҙәгененең рәсми сайтынан күсереп алырға мөмкин.

# ЙӨҘ ЙЫР...



**Башҡортостан Республикаһы 100 башҡорт йыры тупланған йыйынтыҡҡа патент алды.**

Улар араһында төрлө жанрҙағы йырҙар - "оҙон көй", "һалмаҡ көй", "ҡыҫҡа көй" бар. Исемлектә - "Урал", "Буранбай", "Зөлхизә", "Ҡаһым түрә", "Салауат", "Гөлнәзирә" һәм башҡалар. "Башинформ"ға Республика халыҡ ижады үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, Роспатенттың мәғлүмәттәр базаһына һәр композиция тураһында мәғлүмәттәр: йырҙың тарихы, ноталар һәм текст индерелгән. Тыңлау өсөн тура һылтанма ла бар. Патент алған йырҙарҙың тулы исемлеге Республика халыҡ ижады үҙәге сайтында урынлаштырыла.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2018 йылда ҡурай Башҡортостандың территориаль бренды булараҡ теркәлде. 2020 йылда Башҡортостан Республикаһының матди булмаған мәҙәни мираҫ тураһында законы ҡабул ителде.

КЕМ АЛЫҠ?

# МӨХТӘРӘМ ЙӘМӘҒӘТ!



**2021 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланыуы, 5-15 апрелдә хатта ташламалы хаҡ менән яҙылып булыуы тураһында 1-се биттә хәбәр иттек инде.**

• Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек. Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы енер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

• Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торабыҙ икәнде беләһегеҙ. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ.

• Гәзит-журналдарға яҙылыу миҙгеленең һәҙәмтәһе, баҫмабыҙҙы уҡыусыға алып барып еткереү, пропагандалау күп йәһәттән почта хеҙмәткәрҙәренең фиҙаҡәрлегенә, тырышлығына бәйле булыуын таныйбыҙ, баһалайбыҙ һәм уларҙы ла бүләктәребеҙ менән дәртләндереп торабыҙ. Ошондай уҡ бүләктәр сираттағы яҙылыу миҙгелендә лә буласаҡ, тип вәғәҙәләйбеҙ почта хеҙмәткәрҙәренә.

• **Һәм тағы.** Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы туғандарына, атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарына һәм таныштарына яҙҙырып бүләк итә ала.

**Шулай итеп, бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, башҡорт баҫмалары араһында "Киске Өфө" гәзитәнен дә үҙенең лайыҡлы урынын һаҡлауына булышлыҡ итәйек.**

МӨХӘРРИРИӘТ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТОРМОШ ӨЙРӘТӘ,

## өйрәтмәһә, көйрәтә

Һүҙҙә тороу - ҙурлыҡ, һүҙҙә тормау - хурлыҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Эшләгәндә мин ял итәм. Эшһеҙ йөрөгәндә йәки ҡунаҡтар ҡабул иткәндә мин нык арыйым.

**(Пабло Пикассо).**

Һалым тураһында һүҙ барғанда патриоттар әллә ҡайҙа юғала.

**(Джордж Оруэлл).**

Ҡатын-ҡыҙ бер ҡасан да аҡса өсөн кейәүгә сыҡмай. Сөнки быйын алдынан ғашиҡ булырға уларҙың аҡылы етә.

**(Чезаре Павезе).**

Тормош тәжрибәһе - ул эшләнгән хаталарың күләменең сифатҡа күсеүе.

**(Б. Крутиер).**

Ике ҡәмәгә баҫып торма - һыуға осорһоң.

**(Бенг).**

Һәр көн - ул бәләкәй генә ғүмер: һәр иртән йоҡонан уяныу - ул бәләкәй генә йәшлек; һәр көн йоҡларға ятыу - ул бәләкәй генә үлем.

**(А. Шопенгауэр).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Йәшәгән, ти, ике аҡыл эйәһе. Берәүһе йыш ҡына яңылыша торған булған, ләкин башҡалар уның ысынлап та бөйөк кеше икәненә ысын күңелдән ышанған. Икенсеһе ысынлап та юғары белем эйәһе булған, әлбиттә, уға ышаныусылар ҙа аҙ булмаған.**

**Бер ваҡыт ике аҡыл эйәһе лә үҙ уҡыусылары менән бергә тәбиғәт ҡазаһына осрай һәм кеше йөндәрен тамуҡ менән ожмахҡа ебәреүсе, хөкөм итеүсе ике фәрештә алдына барып баҫа. Фәрештәләр һәр береһенән һорау ала һәм шулай тип ҡарар итә: беренсе аҡыл эйәһе һәм уға ышаныусы уҡыусылары - тамуҡҡа, икенсе аҡыл эйәһе һәм уның уҡыусылары ожмахҡа китә. Барыһы ла аптырашҡа ҡалған. "Ни өсөн улай?" тигән һорауға фәрештәләр шулай тип яуап биргән: "Ике аҡыл эйәһе һәм уларҙың уҡыусылары ла ниmәгәлер ышана. Беренсе аҡыл эйәһе ниндәйҙер юғары көскә ышанған, тип уйлай, ләкин бары тик үҙенә генә ышана, ә уның артынан барыусылар Хәҡиҡәткә түгел, тимәк, уҡытыусыларына табына. Икенсе аҡыл эйәһе тик Хәҡиҡәткә ышана. Уның уҡыусылары ла Хәҡиҡәт эҙләүселәр, кешегә табыныусылар түгел. Үлемдән һуң йәшәү - ул Хәҡиҡәтте табыу. Уның ҡанундары кешеләр тарафынан уйлап сығарылһа, тарих бөтөнләй икенсе булыр ине. Шуға күрә беҙҙең ҡарарҙы башҡасаға үҙгәртеп булмай".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Кин коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танытҡысы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт: Сәриә ҒАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 2 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3400
Заказ - 228/03